✓ ***Баймы беҙ, фәҡирме - был мөһим түгел, үҙеңдең ошондай хәлеңә ниндәй мөнәсәбәттәһең - шул мөһим. Ярлымын, тип көйөнөп ултырмаһаң, бер тин аҡсаң булмағанда ла тормошҡа шатланып бағыуҙан һәм йылмайыуҙан туҡтамаһаң, фәҡирлек - бәлә түгел. Тимәк, йәшәү дауам итә һәм ул берҙән-бер көндө мотлаҡ яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәк.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 МАРТ (БУРАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№9 (479)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Рәми рухы...**

берләштерә, уйға һала



5

**Ваҡытлыса сигенәйек тә...**

үҙебеҙҙең спортсыларҙы әҙерләйек



6

**Башҡортса бейейбеҙме,**

йәки Ниңә башҡорт бейеүсеһенең тыпырҙауынан ат тояғы тауышы ишетелмәй?



8-11

**Зәйтүн ағасы һәм кеше:**

ваҡыт менән һыналған дуҫлыҡ



12-13

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Байҙар - байый, ярлылар фәҡирләнә бара. Ошондай шарттарҙа ҡайһы бер партияларҙың социаль ғәҙеллек принциптарына ҡайтырға саҡырыуы нигеҙлеме?

***Вилур ӘХМӘТОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ-ның Сибай филиалы иҡтисад факультеты деканы:*** Социаль ғәҙеллек принциптарына саҡырыу, әлбиттә, нигеҙле, тип раҫлайым. Сөнки, ысынлап та, байҙар байый бара, ә бына урта синыф ихтыяждары ҡәнәғәтләндерелмәй ҡала килә. Владимир Путин "Комсомольская правда" гәзитендә баҫылып сыҡҡан үҙенең "Ғәҙеллек төҙөлөшө. Рәсәй өсөн социаль сәйәсәт" тигән мәҡәләһендә ошо темаға ҡағылып, матди тигеҙһеҙлек айырмаһын кәметеү мәсьәләһе хаҡында бик асыҡ әйтте. Быны ул адреслы социаль сәйәсәт иҫәбенә генә түгел, ә һәр кемдең эшкә һәләтлегенә лә, үҙен, ғаиләһен етерлек дәрәжәлә килем менән тәьмин итеү мөмкинлегенә таянып та хәл итеү сараларын билдәләне. Шул саралар иҫәбендә, әлбиттә, ауыл хужалығын үҫтереү мәсьәләһе төп урынды биләй. Әлеге ваҡытта Урал аръяғы райондарында ауыл ерҙәрендә төрлө яҡлап эшҡыуарлыҡты үҫтереү бурысы тора. Эште белгән, лайыҡлы кешеләр бар, әлбиттә, ләкин уларға иҡтисад һәм финанс мәсьәләләрендә ярҙам итергә, уҡытырға, өйрәтергә тура килә: улар өсөн махсус курстар, ҡыҫҡа ваҡытлы уҡыуҙар, дәрестәр ойоштораbыҙ.

***Әмир ШАМАЕВ, иҡтисад һәм медицина фәндәре докторы, профессор, академик:*** Дөрөҫөн әйткәндә, был бик ҡатмарлы мәсьәлә. Ни өсөн тигәндә, бөгөн байҙар һәм ярлылар ҡатламдарының поляр йүнәлештә бер-береһенән алыҫлашыуы арҡаһында улар араһында бик ҙур айырма хасил булды. Бай ҡатлам байыған һайын, ярлылар фәҡирләнә бара. Артабан да полярлашыуға юл ҡуйыу бик етди эҙемтәләргә алып киләсәк. Берәүҙәр 90-сы йылдар анархияһынан оҫта файҙаланып, тотош завод, предприятиеларҙы, башҡа төр эре милекте ҡулына төшөрҙө һәм әсе тирен түкмәй генә бер көн эсендә байға әүерелде. Ә бит был байлыҡ дәүләттеке, тимәк, халыҡтыҡы ине! Халыҡ ауыҙын асып тороп ҡалды. Социаль тигеҙһеҙлек айырмаһы хатта ки шул кимәлгә барып етте: байҙар шәхси яхталар, самолеттар, вертолеттар, зиннәтле һарайҙар, хатта тотош спорт клубтарын һатып ала башланы. Еңел табыштан баштары әйләнеп хаттин ашҡан был байҙар үҙ илендәге операция талап ителеп тә, уны түләргә аҡсаһы булмаған сабыйҙар ҡарашынан да, тиндәрен һанап көн күргән ҡарт-ҡоронан да тартынмай, байлыҡтарын сит илгә сығарып бөтөп, типтереп йәшәүен беләә. Һуңғы ваҡыт, үҙегеҙ күрәһегеҙ, сит илдәрҙән күсемһеҙ милек һатып алыусылар бермә-бер артты. Күрәһең, улар байлыҡҡа ҡарата иғлан ителәсәк һалым тураһында алдан ишетеп белгәндәр, тип уйларға кәрәк. Байлыҡҡа һалынасаҡ һалым бына ошондай шашып байығандарҙың нәфсеһен бер аҙ ауыҙлыҡлау сараһы булмаҫмы, тигән уй бар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ*

# УЙЛАНЫРҒА ӨЙРӘТӘ БЫЛ БАҪМА

**"КискеӨфө"нө ижад итеүселәргә һәм был баҫманы беҙҙең кеүек үк яратып уҡыусыларға Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты студенттарынан ҡайнар сәләм күндерәбеҙ.**



Институтыбыҙ башҡорттар төйәгенең үҙәгендә, Уралдың йөрәгендә - таусылар ҡалаһында урынлашҡан. Белем алайым, тәбиғәттән бирелгән һәләтемде асайым тигән һәр йәш кешегә бында бөтөн уңайлыҡтар булдырылған. Уңайлыҡтар эсендә генә түгел, рухиәт мөхите солғанышында йәшәйбеҙ, уҡыйбыҙ. Был йәһәттән беҙҙең уҡыу йорто башҡа бер уҡыу йортона ла оҡшамаған. Институтыбыҙ бинаһының һәр ҡатында халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен һынландырған барельефтар, һәйкәлдәр менән осрашаһың, һәр аудиторияла шулай уҡ халҡыбыҙ тарихының теге йәки был осороna, шәхестәренә арналған картиналарҙы байҡайһың. Былар барыһы ла йәш кеше өсөн рухи тәрбиә сығанағы булып тора. Уҡыу йорто директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов етәкләгән уҡытыусылар коллективы беҙҙе буласаҡ һөнәребеҙ серҙәренә өйрәтеүҙән һәм белем биреүҙән тыш, иң беренсе нәүбәттә һәйбәт кеше булыу, уңышҡа өлгәшеү, дуҫтарың, коллегаларың, ғөмүмән, бөтә кешеләр менән дә яҡшы мөнәсәбәттәр булдырыу һабаҡтары бирә. Сөнки бөгөн тәрбиәлелек үҙен һәм башҡаларҙы хөрмәт иткән кешеләрҙең визит карточкаһы булып тора бит.

"Киске Өфө" гәзите шулай уҡ беҙҙең өсөн рухиәт, тәрбиә, мәғлүмәт сығанағы. Беҙ уны шул тиклем яратып уҡыйбыҙ. Был баҫманан һәр кем - филологтар ҙа, тарихсылар ҙа, технологтар ҙа үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡый ала. Беҙ бигерәк тә тәрбиә, әхлаҡ темаларына яҙылған мәҡәләләрҙе үҙ итәбеҙ, уларҙы дәрестәрҙә, ял иткәндә, айырыуса дөйөм ятаҡта бергәләшеп йыйылып уҡыйбыҙ, һуңынан мәҡәләгә, әҫәргә, геройҙарға ҡарата үҙ фекеребеҙҙе белдереп, фекер алышыуҙар ойоштораbыҙ. Студент тормошона ғәм, йәм өҫтәгән, йәш кешене уйланырға һәм фекерләргә өйрәткән гәзиткә рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

**Сибай институты студенттары.**

✓ *Социаль ғәҙеллек принцибы шуны талап итә: улар был байлыҡты уның хаҡлы хужалары булырға тейешле ил халҡы менән бүлешергә, уртаҡлашырға бурыслы. Был сара бөтә прогрессив илдәрҙә лә ҡулланыла.*



ИШАРА

# АС ҠАЛМАЙЫҠ ТАҒЫ...

**Һайлауҙар мәле етһә, үтелгән ғүмер юлындағы төрлө хәлдәр, ваҡиғалар иҫкә төшә лә тора. Уларҙы "Киске Өфө" уҡыусыларына күп һөйләнем инде. Баҫмабыҙҙың сыға башлауына ла 10 йыл тула бит. Ә мин уның тәүге һандарынан алып яҙышам. Уны уҡымайынса, уға яҙышмайынса йәшәй алмайым...**

Рәсәй президентлығына йә депутатлыҡҡа кандидаттарҙың һайлау алды сығыштарына ҡолаҡ һалмай булмай бит инде. Шулай бер көндө ошо сығыштарҙы тыңлап ултырҙым да, ҡапыл совет заманындағы бер көләмәс иҫкә төштө. Хәтерегеҙҙәлер, Л. И. Брежневтың ҡалын ғына "Малая Земля" тигән китабы баҫылып сыҡҡайны һәм бар совет халҡын уны уҡып сығырға мәжбүр иткәйнеләр. Бына бер саҡ Л. И. Брежнев Сусловты кабинетына саҡырып ала ла: "Минең "Малая Земля" тип аталған китабымды уҡыныңмы?"- тип һорай. "Уҡыным,- ти Суслов, - хатта өс ҡат уҡып сыҡтым. Шундай мауыҡтырғыс, оҫта итеп яҙғанһығыҙ..." Шул һүҙҙәрҙән һуң ҡапыл урынынан тороп, ишеккә йүнәлә. Л.И. Брежневтың: "Ҡайҙа ашығаһың?" - тигән һорауына Суслов: "Шундай яҡшы китап яҙғанһығыҙ, Леонид Ильич, уны тағы ла бер тапҡыр уҡып сығайым әле..." тип яуап бирә. Суслов артынан ишек ябылғас, Л. И. Брежнев: "Ул китапты бөтәһе лә маҡтай, әллә үҙемә лә уҡып сығырға инде..." тигән һығымта яһап ҡуя, имеш. Шуның һымаҡ, бар кандидаттар ҙа матур һөйләй, ләкин ул һүҙҙәр уларҙың йөрәгенән сығамы ла, үҙ ҡулдары менән яҙыламы икән, тип кенә борсолам...

Һүҙемде дауам итеп, йәшлек саҡтағы тағы бер ваҡиғаны иҫкә төшөрҙөм. Коля исемле студентты бөтәһе лә хөрмәт итә ине. Тәүге курстарҙа уҡығанда уҡ ғаилә ҡороп ебәргән. Ҡатыны, 4 йәшлек улы менән дөйөм ятағыбыҙҙың бер бүлмәһен биләйҙәр. Иртән урам һеперә, көндөҙ уҡый, кистәрен гәрәбәләрҙән ювелир биҙәүестәр яһап, салондарға тапшырып һаттыра. Ундай әүҙем курсташҡа кем һоҡланмаһын инде! Беҙ һәр саҡ бер-беребеҙгә йылмайып сәләм биреп йөрөйбөҙ. Сөнки ул иртәнге сәғәт 6-ла ҡар көрәргә сыға, ә мин ҙур сумкамды күтәреп, почта бүлексәһенә йүгерәм (уҡығанда иртәнге почта ташыусы булып эшләнем). Бер көндө уҡыу йортобоҙҙоң ашханаһында бер өҫтәл артына тура килдек. Коля менән бер өҫтәл артына эләгеүемә шатланып, ашымды әкренләп ашай-ашай, табындашҡа көләмәс һөйләй башланым. Коля мине көлә-көлә тыңлай. Уның ихлас тыңлауын күреп, бер мәҙәкте һөйләп бөттөм дә, икенсеһен башланым. Коляның юмор яратыуын аңлап, өсөнсөһөн дә һөйләйем, тиһәм, ашымды ашап бөтөргәнмен икән. Гарнир менән котлетҡа күсәйем тип үрелгәйнем - тәрилкәм буш. Минең тәрилкәләге котлет Коляның сәнскеһенә эләгеп, уның ауыҙына инеп бара. "Коля, был бит минең котлет!" - тип әйтеп кенә өлгөрҙөм. Үәт әй, ысынлап та әүҙем кеше ине шул Коля! Минең хәбәремде онотолоп тыңлай-тыңлай, ул үҙенең ризыҡтарын ашап бөткән дә, минең алдымдағы тәрилкәне лә бушатҡан. Коля, уңайһыҙланып: "Ғәфү ит инде, үҙең ғәйепле, бигерәк мауыҡтырғыс итеп һөйләйһең бит", - тип, миңә яңы порция котлет һатып алып бирҙе лә, компотын аяғүрә баҫып ҡына һемереп, сыға һалып китте...

Бына был һайлауҙар алдынан да бик күп һөйләнеләр. Хатта баштар буталып бөттө. Күп һөйләп, ил халҡын ас ҡалдыра күрмәһендәр, тип ҡурҡыта башланы хатта...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Байҙар - байый, ярлылар фәҡирләнә бара. Ошондай шарттарҙа ҡайһы бер партияларҙың социаль ғәҙеллек принциптарына ҡайтырға саҡырыуы нигеҙлеме?

(Башы 1-се биттә).

***Венера НАСИБУЛЛИНА, иҡтисад колледжы уҡытыусыһы:*** Эйе, тап ошондай шарттарҙа социаль ғәҙеллеккә саҡырыу нигеҙле, тип иҫәпләйем. Социаль ғәҙеллек - ул ил байлыҡтарын файҙаланыуҙа бөтә ҡатлам халыҡтарҙың да тигеҙ хоҡуҡҡа эйә булыуында сағыла. Ә беҙҙә бындай хоҡуҡҡа үҙҙәрен юғары ҡатлам вәкилдәре иҫәпләгән һанаулы ғына кешеләр эйә, сөнки ил байлығы тап улар ҡулында тупланған. Социаль ғәҙеллек принцибы шуны талап итә: улар был байлыҡты уның хаҡлы хужалары булырға тейешле ил халҡы менән бүлешергә, уртаҡлашырға бурыслы. Был сара бөтә прогрессив илдәрҙә лә ҡулланыла. Мәҫәлән, Францияла байлыҡҡа һалым донъяла иң камил һәм ғәҙел тип иҫәпләнә. Унда һалым хаҡы 1,3 млн. евро (йәғни 52 миллион һум) торған милеккә һалына. Әйткәндәй, һалым ил эсендә генә түгел, унан ситтәге милеккә лә һалына. Байлыҡҡа һалым шулай уҡ Испанияла, Норвегияла, Һиндостанда, Швейцарияла һәм башҡа илдәрҙә лә уңышлы ғәмәлгә ашырыла. Илебеҙҙәге көслө иҡтисадсыларҙан иҫәпләнгән РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Думаның Бюджет һәм һалым буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Оксана Дмитриеваның күҙаллауҙарынса, байлыҡҡа һалым ил бюджетына йылына 200-250 миллиард һум аҡса килтерәсәк. Әйткәндәй, бында тағы ла йән башына килем һалымы өсөн прогрессив шкаланы ла (йылына 3 миллиондан ары эш хаҡынан) индергәндә, ти О. Дмитриева, илдең иң бай 500 кешеһе генә лә бюджетҡа 400-450 миллиард һум түләйәсәк. Был аҡса, иҡтисадсы фекеренсә, инвестиция льготаларын, инновация предприятиелары льготаларын, фәнни предприятиелар һәм юғары мәктәп ойошмаларының бөтә льготаларын ҡаплауға артығы менән етәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Дәүләкән районының башҡорт теле уҡытыусылары.

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: март айында ла 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Мартта гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ.** Ә февралдә "Ҡөрьән-Кәрим" китабы Мәләүез районы Һарыш ауылынан **Роза Саҙретдиноваға**, Учалы районы Илсе ауылынан **Әлфиә Хәлиловаға** эләкте.

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе: 17 мартҡа тиклем яҙылһалар, апрелдән өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Өс айға яҙылыу хаҡы - 174 һум 12 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**
Электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, **kiskeufa@ufacom.ru**
Блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы йыйылышында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2011 йылдағы эшмәкәрлегенә отчет менән сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, бөгөн Хөкүмәт алдында торған төп бурыстарҙың береһе - халыҡты эш менән тәьмин итеү. Республикала эшһеҙлек кимәле Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән юғары булып ҡала - унан 1,1 процентҡа ҡалыша. Президент әйтеүенсә, әлегә эш биреүселәрҙең барыһы ла үҙҙәрендә булған вакансиялар тураһында мәғлүмәт бирмәй. Һөҙөмтәлә, был ойошмаларҙа эшләй алырлыҡ кешеләр эшкә урынлаша алмай, ә эш менән тәьмин итеүселәрҙең иһә кәрәкле эшселәре юҡ.

✓БР Президенты билдәләүенсә, 2011 йылда республика, ниһайәт, иҡтисади көрсөк эҙемтәләрен йырып сығыуға өлгәште. Республиканың эске тулайым продукты бер йылда 10 процентҡа тиерлек артҡан - был Рәсәй Федерацияһындағы иң яҡшы күрһәткестәрҙең береһе. Был күрһәткес буйынса беҙ триллион һумға яҡынлаштыҡ - республиканың эске тулайым продукты 980 миллиард һум тәшкил итә.

✓Төбәк башлығы һүҙҙәренсә, республикала закондар сығарыу базаһы ла һиҙелерлек камиллаштырылған, был да һәр төрлө инвестицион проекттарҙы тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итә. Проекттарҙың күбеһе граждандарға 2011 йылда тәҡдим ителгән. Бөгөн республика территорияһында 40-ҡа яҡын инвестпроект тормошҡа ашырыла. Әммә, Рөстәм Хәмитовтың билдәләүенсә, йән башына инвестициялар күләме буйынса беҙ Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән ике тапҡырға тиерлек ҡалышабыҙ.

✓Урал аръяғын үҫтереү комплекслы программаһы сиктәрендә 2011 йылда биш миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән. Шуларҙың 3,5 миллиарды - төрлө инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыуға, ә 1,5 миллиарды социаль инфраструктураға киткән. Күрелгән саралар 1,6 меңдән ашыу эш урыны булдырыу мөмкинлеге биргән. Был турала БР Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Ул республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарын үҫтереү программаһы тураһында ла һөйләне. Уны тормошҡа ашырыуға аҡса быйыл бүленә башлаясаҡ.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БӨРКӨТ СЕБЕН АУЛАМАЙ...

**Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: бөркөт тимерҙәй ҡатғыл осло тырнағын себенгә батыра ла, ҡорбанын суҡып ала. Көлкөмө был күренеш? Көлкө. Ысынлап та, себен ҡыуалап, ике ҡоластай ҡанаттарын йәйеп осоп йөрөүсе һәм ҡорбанына шыҡыйыусы бөркөттө күҙ алдына килтереп тә булмай хатта. "Бөркөтлеккә пародия" тип аталыр ине был күренеш. Бөркөт - ғорурлыҡ, мөхәббәтлек символы, ә был күренеш ғорурлыҡтың бахырлыҡҡа әүерелеүе һымаҡ ҡабул ителер ине. Тәбиғәттә былдай - бөркөттө себен аулатырлыҡ - хилафлыҡтарға юл ҡуйылмай, унда ғорурлыҡ, мөхәббәтлек, ябайлыҡ кеүек илаһи сифаттар һәр саҡ үҙгәрешһеҙ, үҙ асылына тоғро ҡала. Тик быны кешелеккә килгәндә...**



Үкенескә ҡаршы, кешелек ошондай пародиялар менән лыҡа тулы. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, "Бөркөт себен ауламай" мәҡәләнә кешелектең һәм милләттең йәшәйешен тәьмин итергә, йола-традицияларын, йәшәү рәүешен, булмыш-асылын һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итерлек фекер-идея ла һалынған. Бөгөн илебеҙ етәкселәре, сәйәсмәндәр, ғалимдар интеграция, глобаллəшеү, иҡтисадты модернизациялау, Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеү хаҡында һүҙ алып барған бер ваҡытта был йүнәлештәр байҙар менән ярлылар араһындағы арауыҡты көндән-көн алыҫлыштыра барыуына күҙ йомоп ҡарала. Кисәге байҙар бөгөн олигархтар, кисәге ярлылар - бөгөн фәҡирҙәр. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙең тәүге президенты башлаған сәйәси һәм иҡтисади реформалар иң баштан уҡ дөрөҫ булманы. Сөнки илебеҙ халҡының 95 проценты һатыу итә белмәй һәм тағы ла шунсамаһы үҙенең эшен асып эшмәкәрлек итеүгә һәләтле түгел. Сөнки бөркөт себен ауламай һәм унан бер ваҡытта ла был ғәмәлде башҡартып булмай. Асылда коллективлыҡ рухы менән һуғарылған Рәсәй менталитеты өсөн капитал туплауҙың нимәгә алып киләсәген Ленин да күргән һәм уның хаҡлы булыуын бөгөн тарих раҫлай башланы. Күреңһегеҙ әле: уның том-том хеҙмәттәре тарих сүплегенә ырғытылған урынынан киренән ҡулға алынасаҡ.

Был урында сит ил политологтары ла мең тапҡыр хаҡлы: йәғни, Рәсәй капитализмға һәләтле түгел, уның юлы көйләнмәле социализмда йәки абсолют монархияла, йәғни батшалыҡта. Батшалыҡ тарихта ҡалды, ул хатта иҡтисады алға киткән Европаның ҡайһы бер дәүләттәрендә традицияларҙы һаҡлау маҡсатында символик рәүештә генә һаҡланып ҡалған йәғни уларҙағы королдәр дәүләт менән идара итмәй. Тимәк, беҙгә ниндәй юл ҡала тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, социализм. Социализмдың нигеҙендә граждандарҙың һәм милләттәрҙең социаль-иҡтисади һәм рухи-мәҙәни гарантияһы принциптары ята. Үкенескә ҡаршы, беҙ һәр ваҡыт һуңлайбыҙ. Рәсәй бөгөн ең һыҙғанып капитализм төҙөгән (асылда ил байлығын законлы һәм законһыҙ юлдар менән айырым ҡулдарға туплау) бер ваҡытта донъяның капитал донъяһы иҡтисади көрсөк кисереп, үҙенең булдыҡһыҙ система булыуын иҫбат итә. Шул уҡ ваҡытта социалистик юл менән ышаныслы һәм йылдам алға барыусы Ҡытай һәр йәһәттән үҙенең хаҡлы юлда барғанлығын иҫбатлай. Ә беҙ һаман бөркөттән себен аулатыусы көлкөлө һунарсы хәлендәбеҙ. Әгәр ҙә бөркөт, ысынлап та, себен ауларға тотона икән, ул шул мәлендә бөркөт булыуынан туҡтай.

Педагогия институтына уҡырға ингән бер егетте беләм инем. Ул был уҡыу йортона инеү имтихандарын нисек тапшырғандыр, еңел үк булмаған конкурс һынауын нисек үткәндер, әммә үҙенең уҡыуға һис кенә лә барымы юҡ ине. Барымы булыу ғына түгел, хатта уҡыуғанын ятлап имтихан бирерлек тә һәләте юҡ ине үҙенең. Ҡыҫҡаһы, педагогик юғары уҡыу йортонда белем алыр өсөн яратылмағайны ул. Ахырыны, ир-ат уҡытыусылар ҡытлығы арҡаһында үҙен уҡырға алғандарҙыр, башҡалар ыңғайына тартылып уҡып китер тип өмөтләнгәндәрҙер комиссия ағзалары. Әйткәндәй, мәктәптә ир-ат уҡытыусылар ҡытлығы әле булһын дауам итә, әле булһын беҙҙең илдә ир-ат тәрбиәнен ҡатын-ҡыҙҙар алып бара, һөҙөмтәлә ебек, ихтыярһыҙ егеттәр барлыҡҡа килә. Был - махсус һөйләшеүҙе талап иткән етди мәсьәлә, алдараҡ был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтырбыҙ әле.

Шулай итеп, егетебеҙ көндәр-төндәр, аҙналар-айҙар буйына китапхананан, ятаҡтың уҡыу бүлмәләренән сыҡманы, оҙон сәғәттәр буйына китапҡа текәлеп ултырыр ине. Үҙе шыбыр тиргә батып, күлдәктәре һығып алмалы була торғайны. Ун йыл буйына "ыҙаланды" ул, уҡытыусыларының да ҡотдәһенә сыҡты. Көс-хәл менән уҡып бөтөрөп диплом алды ла, артабан уҡытыусылыҡ һөнәрендә бер көн дә эшләмәне. Төрлө урындарҙа эшләп йөрөй торғас, иң һуңында алған белеме йүнәлешенә һис бер ҡатнашлығы булмаған, улай ғына ла түгел, ғөмүмән, юғары интеллект талап ителмәгән урында эшләй башланы. Үҙе менән осрашып һөйләшкәндә, ул туҡтауһыҙ зарлана, үҙенең һөнәрендәге уңышһыҙлығын, тормошонда бәхетһеҙлеген кемдәрҙәндер күрә. Имеш, уға кемдер аяҡ сала, күрә алмай, үҙенең дәғүәсеһе һанай һ.б. Ошо тәңгәлдә урынлы һорау тыуа: ун йыл буйына нинә ул үҙе лә ыҙаланы, башҡаларҙы ла ыҙалатты икән? Нимәгә кәрәк булды уға педагогик институтта белем алыу? Аныҡ һөнәр бирә торған берәр техникумда йә училищела уҡып, шул йүнәлештә хеҙмәт биографияһын башлаһа, бөгөн унан да бәхетлерәк кеше булмаҫ ине, тием.

Ә үҙенең тәбиғәттән бирелгән әллә ни саҡлы һөнәрҙәре бар ине бит. Ауылдың беренсе егете образындағы типһә тимер өҙөрлөк, баҫһа баҡыр иҙерлек бынамын тигән егет. Оҙон буйлы, баһадир кәүҙәле, ҡолас етмәҫлек киң яурынлы, үҙен тотошонда, атлап йөрөшөндә мөһабәтлек сағыла, һин-һипаты миһырбанлыҡ менән тулы. Үҙе сумарт, мул ҡуллы, ҡурҡыу белмәй, уға таянырға, ышанырға була. Гармунын да уйнай, ҡушылып йырлап та ебәрә, ер һелкетеп бейеп тә ала. Көлкөлө ваҡиғалар, лаҡаптар һөйләй башлаһа, ваҡиғаларҙың геройҙарының ҡыланыштарын уларҙың тауыштары менән башҡарып, улар булып ҡылана башлаһа, йығылып ятып сәғәттәр буйына көлөрлөк. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡойоп ҡуйған артист та ине ул. Әгәр ҙә артислыҡҡа уҡыһа, бөгөн комик пландағы 1-се һанлы сәхнә оҫтаһы сығыр ине үҙенән. Ҡул һәм бил көрәшендә лә, бокста ла берәүҙән дә еңелмәй. Үҙе малсылар ғаиләһендә тәрбиәләнгәнгә күрә малдар һәм уларҙың ауырыуҙары, дауалау серҙәре һәм ысулдары хаҡында барыһын да белә, теләһә ниндәй техниканы, ул трактор булһынмы, автомашинамы – биш бармағындай белә, тирә һәм ремонтлай ала. Ҡыҫҡаһы, педагогик һөнәргә юғары уҡыу йортонда белем алыуҙан тыш, етмеш һөнәргә эйә егет ине ул. Тик быны ул нишләп ҡалған етмеш һөнәренең береһен һайлап, шуның буйынса китмәне икән? Әйтеүе ҡыйын. Мин уҡытыусылыҡ һөнәрен "себен аулауға" тиңләмәйем, шулай ҙа бөркөт һынлы ошо егеттең үҙенең тәбиғи тәғәйенләнеше йүнәлешендә һөнәр үҙләштерергә ынтылмауын ғына иҫтә тотоп, башҡалар уның хатаһын ҡабатламаһын өсөн "Бөркөт себен ауламай" тип иҫкәртергә теләр инем.

Был мәҡәлде нығытыусы тағы ла бер мәҡәлде иҫкә төшөрөргә булалыр был осраҡта. Ул да булһа, "Йөнө теләгән – йылан ите ашаған" мәҡәле. Халыҡ аҡылының тағы ла сөңгөләнәрәк төшһәк, "Үлән үҫкән ерендә генә үҫә" тигән әйтем дә иҫкә төшә. Улары хаҡында ла алдағы һандарҙа һөйләшербеҙ әле.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй хәрбиҙәрҙе контракт нигеҙендә ҡабул итәсәк армияға күсеүҙе планлаштыра, ул яҡынса 450 мең кешенән торасаҡ. Был турала Өфөлә үткән Бөтә Рәсәй аграр форумы барышында Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Владимир Путин хәбәр итте. Уның әйтеүенсә, бөгөн Рәсәйҙә армия туплауы еңел түгел. Беренсенән, хеҙмәт итеү ваҡыты 12 айға тиклем ҡыҫҡартылған. Икенсенән, 1992 йылдан 2002 йылға тиклем беҙҙең илдә гәйәт ҙур демографик упҡын күҙәтелде, уның эҙемтәләре үҙен һиҙҙертәсәк әле. Проблеманың өсөнсө ягы -Ҡоралы Көстәр составына саҡырырға ярамаған кешеләр категорияһының күбәйеүе. Былар барыһы ла туранан-тура оборонаға һәләтлелектә сағыла. Шуға күрә хәрбиҙәрҙе контракт нигеҙендә ҡабул итәсәк профессиональ армияға күсеү зарурлығы килеп тыуҙы.

✓Күгәрсен районында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зәйнәб Биишева исемендәге район әҙәби премияһын тапшырыу тантанаһы үтте. Йола буйынса премиялар Туйымбәт ауылында, яҙыусының йорт-музейында тапшырылды. 2011 йыл һөҙөмтәләре буйынса З.Биишева исемендәге әҙәби премияға билдәле шағирә, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әнисә Таһирова, филология фәндәре докторы Рәшит Шәкүр, рәссам-биҙәүселәр Наил Шакиров һәм Анфиса Шакирова лайыҡ булды.

✓БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, хеҙмәткәрҙәр ял һәм байрам көндәрен рациональ файҙаланһын өсөн 11 марттағы, йәкшәмбеләге, ял көнө йомаға, 9 мартҡа, күсерелгән. Шулай итеп, быйыл Башҡортостан Республикаһында 8, 9 һәм 10 март ял көндәре булып тора.

✓2012 йылда Башҡортостандың 10 ҡалаһында "Берҙәм тәҙрә" принцибы буйынса дәүләт хеҙмәттәре күрһәтеүсе күп функциялы үҙәктәр филиалдары асыласаҡ. Дәүләт мәғлүмәт системалары - реестрҙы, дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталын камиллаштырыу дауам итә. Бөгөн реестрға, әлегә тест режимында, 17 ведомство һәм 35 муниципаль берәмек тоташтырылған. Порталда 400 төрҙән ашыу хеҙмәт күрһәтелгән.

***✓ Балаларҙың туған телендә һиҙелерлек акцент менән һөйләүе күңелгә ауырыраҡ булды. Тимәк, был балалар ғаиләлә лә, гимназияла ла сит телдә аралаша, ә ошондай саралар ваҡытында ғына туған телдә һупалай.***

*УӘТ, ШУЛАЙ!*

**Өфөлә Бөтә Рәсәй аграр форумы булып үтте. Унда ҡатнашыу өсөн Рәсәйҙең бөтә субъекттарынан 800-ҙән ашыу делегат килде. Пленар ултырышта РФ Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин, уның урынбаҫары Виктор Зубков, РФ ауыл хужалығы министры Елена Скрынник, ил төбәктәре башлыҡтары, федераль етәкселәр ҡатнашты. Форумда аграр тематикаға бәйле бөтә төр мәсьәләләр ҡаралды, ауылдарҙағы социаль-иҡтисади сәйәсәттең төп проблемалары тикшерелде. Иғтибарығыҙға - форумда күтәрелгән ҡайһы бер мәсьәләләрҙең тезистары:**



# АУЫЛДАРҘЫ ҺАҠЛАМАҺАҠ...

## ил үҙе һаҡланырмы?

➔ Владимир Путин ауыл хужалығын ил өсөн иҡтисадтың стратегик тармаҡтарының береһе булыуын билдәләне. Уның фекеренсә, 2006 йылдан Рәсәйҙең агросәнәғәт комплексына йәлеп ителгән триллион ярым һумдан ашыу инвестициялар күләме яҡшы һөҙөмтә биргән.

➔ Форумда ҡатнашыусылар "2013 йылға тиклем ауылды социаль үҫтереү" федераль маҡсатлы программаһын финанслау күләмен 2012 йылда 4,5 миллиард һумдан 7 миллиардҡа тиклем, 2013 йылда был күрһәткесте 9 миллиард һумға тиклем еткерергә тәҡдим итте.

➔ РФ ауыл хужалығы министры Елена Скрынник белдереүенсә, 2020 йылдан Рәсәй ит һәм һөт менән үҙен-үҙе тәьмин итә аласаҡ. Рәсәйҙә алдағы ике-өс йылда сусҡа итенә ихтыяж үҙебеҙҙә етештерелгән продукция иҫәбенә тәьмин ителәсәк.

➔ Елена Скрынник: "Ауыл хужалығы етештереүселәре сауҙа селтәрҙәренә продукцияны аралашсыһыҙ һата аласаҡ, - тине. -Ваҡлап сауҙа итеүсе компаниялар ассоциацияһы (АКОРТ) Башҡортостандың ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәре менән уларҙың продукцияһын ваҡлап сауҙа итеүсе компанияларға туранан-тура һатыу тураһында килешеү төҙөнө. Был Башҡортостандағы ауыл хужалығы етештереүселәре ваҡлап сауҙа итеүсе компанияларға үҙ тауарҙарын үҙҙәре поставкалай аласаҡ, тигәнде аңлата".

➔ Дәүләт һатып алыуҙары Рәсәйҙә ауыл хужалығы етештереүселәренә туранан-тура ярҙам итеүҙең һөҙөмтәле инструменты булырға тейеш. Аграрийҙарҙың күбеһенең фекеренсә, илдә бөгөн ғәмәлдәге дәүләт һатып алыуҙары системаһынан башлыса продукция етештереүселәр түгел, ә аралашсылар ота. Владимир Путин әйтеүенсә, әгәр күп осраҡта етештереүселәр түгел, ә аралашсыларға ярҙам күрһәтеү килеп сыға икән, әле ҡулланылған система ҡайтанан ҡараласаҡ.

➔ Рәсәйҙә ағымдағы йылда сусҡасылыҡ тармағына ярҙам итеү өсөн алты миллиард һум йүнәлтеләсәк. Махсус әҙерләнгән программа сиктәрендә был тармаҡты үҫтереүгә өс йыл дауамында алтышар миллиард һум бүлеү планлаштырыла.

➔ Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе билдәләүенсә, быйыл ғаилә һөтсөлөк фермаларын үҫтереү программаһы киңәйтеләсәк, ер участкаларын рәсмиләштереү эштәре дауам ителәсәк. Был маҡсатҡа былтыр федераль һәм төбәк бюджеттарынан 120 млн һум йүнәлтелгән. Быйыл был сумма 1,4 млрд һум самаһын тәшкил итәсәк.

➔ Рәсәйҙә ағымдағы йылда 2020 йылға тиклем агросәнәғәт комплексын үҫтереү дәүләт программаһы ҡабул ителәсәк. "Ауыл хужалығын, шул иҫәптән ауыл ерендә бәләкәй һәм урта бизнесты үҫтереүгә ҙур, оҙайлы импульс бирергә тейешбеҙ, - тип иҫәпләй Владимир Путин. - Илдә етештерелгән продукттарҙың конкурентлыҡҡа һәләтен үҫтереү өсөн шарттар булдырыу зарур. Сит илдән килтерелгән продукцияны үҙебеҙҙекенә алмаштырыу процесын тиҙләтергә, үҙебеҙҙең аҙыҡ-түлек баҙарында позицияларҙы нығытырға кәрәк. Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына ҡушылыу йәһәтенән был айырыуса мөһим".

➔ Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Владимир Путин төбәк етәкселәренән ауыл хужалығы етештереүселәренә ял көндәрендә йәрминкәләр ойоштороуҙа булышлыҡ итеүҙе талап итте. Уның фекеренсә, бындай көндәр һәр ерҙә лә үткәрелергә тейеш, йәрминкәләрҙә крәҫтиәндәрҙе сауҙа итеү урындары менән бушлай тәьмин итеү зарур.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауыл хужалығы мәсьәләләренә йөҙ менән боролоуға башланғыс һалырмы был форум? Шулай ғына була күрһен. Рәсәйҙәге ауылдарҙы һаҡлап ҡалмайынса һәм уларҙы үҫтермәйенсә тороп, илебеҙҙе һаҡлап ҡалып булмаясаҡ икәнен барыһының да аңлауы кәрәк. Аңлау ғына түгел, байтаҡ йыйылып киткән проблемаларҙы хәл итеү кәрәк. Ошо проблемалар тураһында Рәсәй кимәлендә матур ғына һөйләшеп алды төбәк һәм ил етәкселәре.**

*ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...*

**Күптән түгел Өфө ҡалаһының 39-сы һанлы гимназияһында Ж.Кейекбаев исемендәге I республика туған телдәр фестивале үтте. Баш ҡалабыҙҙың төрлө мәктәптәренән, райондарҙан килгән уҡыусылар 16 төр телдә сығыш яһаны. Был сығыштарҙа республикабыҙҙа йәшәүсе төрлө милләт ғаиләләрендә туған теленә ҡарата ниндәй мөнәсәбәт тәрбиәләнеүе асыҡ сағылыш тапты.**

# ИЛҺЕҘЛӘНЕП ЙӨРӨМӘҺЕН,

## туған телдә һөйләшһен балалар

Тыуған иленән меңәрләгән километр алыҫлыҡта һәм тиҫтә йылдар йәшәп тә, балаларында туған теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләй алыусы милләт вәкилдәре һоҡландырҙы. Ҡатнашыусылар туған теленең нескәлектәрен асыҡ сағылдырыу өсөн фәнни мәғлүмәт кенә биреп ҡалмай, шиғыр, йыр, бейеү башҡарҙы, йола күрһәтте. Һәр сығыш үҙенсәлекле, эстәлекле булды. Ә шулай ҙа барлыҡ тамашасыларҙы хайран ҡалдырыусы сығыш әрмән ҡыҙыныҡы булғандыр. Тыуған иленән ни тиклем алыҫта булмаһын, барыбер ҙә Әрмәнстанға, Арарат тауына, туған тупрағына, теленә ҡарата оло һөйөү йөрөтөүе иҫте китәрҙе. Бәлки, бәләкәй ҡыҙ Арарат тауын бер тапҡыр ҙа күрмәгәндер, уны ата-әсәһе һөйләүе буйынса ғына ишетеп беләлер. Был мөһим түгел. Иң мөһиме, ҡыҙ халҡының үткәне менән ғорурлана, башҡа халыҡтар араһында үҙ милләтенең урыны һуңғылар рәтендә түгел, тип иҫәпләй, туған телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшы белә. Сәхнә түрендә сатнатып саф әрмәнсә һөйләп, йырлап торған ҡыҙ киләсәктә балаһына мотлаҡ әрмән телендә бишек йырҙары йырларына, туған телендә әкиәттәр һөйләренә шик юҡ.

Фестивалдә 39-сы гимназия уҡыусылары башҡорт телендә сығыш яһап, Башҡортостан Республикаһының төп халҡын һынландырҙы. Сәхнәгә сығыусы балаларҙың туған телендә һиҙелерлек акцент менән һөйләүе күңелгә ауырыраҡ булды булыуға. Тимәк, был балалар ғаиләлә лә, гимназияла ла сит телдә аралаша, ә ошондай саралар ваҡытында ғына туған телдә һупалай. Әйткәндәй, ошо фестивалгә исем биргән бөйөк ғалим - Жәлил Кейекбаев һикһәнгә яҡын сит тел белгән, әммә башҡорт телендә һөйләшкән, үҙ теленә хеҙмәт иткән.

Ҡайҙан килә балала телгә, илгә ҡарата һөйөү? Барыһы ла ата-әсә тәрбиәһенән килә. Башҡорт телен баҫмаҡлайҙар, балаларыбыҙҙы башҡорт телендә уҡытыу өсөн мөмкинлектәр аҙ, тип зарланырға ярата бәғзе берәү. Ләкин ғаилә эсендә баланы башҡорт теленә өйрәтеп, күңеленә рух өрөп тәрбиәләргә берәү ҙә ҡамасауламай бит. Унан һуң, республикабыҙҙа башҡорт теле дәүләт теле статусына эйә, ул мәктәптәрҙә уҡытыла, туған телебеҙҙә һөйләшеүҙән мәктәптә лә, урамда ла бер кем тыймай. Ә беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙҙең битарафлыҡты аҡлар һылтау эҙләйбеҙ. Саф башҡорт телендә һөйләшкән балаларҙы күрһәк, хатта аптыраштан артҡа йығылырға әҙербеҙ. Ә бит баланы туған телгә ылыҡтырыу һәр ата-әсәнең ҡулынан килә. Баяғы әрмән ҡыҙының фестивалдәге сығышы милләттәштәргә тағы бер тапҡыр ошо иң изге бурыс тураһында иҫкәртергә сәбәп булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ, Иле юҡтың ғына теле юҡ," - ти таныш шиғыр юлдары. Башҡортостанда йәшәп, туған тупрағыбыҙҙы тапап йөрөгәндә балаларыбыҙҙы саф башҡорт телендә лә һөйләшергә өйрәтергә кәрәк, тигәнде тағы бер ҡабатлап ҡарайыҡ әле. Үҙем башҡорт та, телем башҡорттоҡо түгел, тип, илһеҙләнеп йөрөмәһендәр өсөн булһа ла.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы ошо көндәрҙә коммуналь хужалыҡтар етәкселәренә өр-яңы КАМАЗ йөк автомобилдәре асҡыстары тапшырҙы. Ирек Ялалов әйтеүенсә, коммуналь хужалыҡтарға һәр яҡтан ярҙам кәрәк, шул иҫәптән транспорттың яңыртылыуы талап ителә. Яңы КАМАЗ-дар юлдарҙы таҙартыуҙа файҙаланыласаҡ. Шулай уҡ ҡаланың коммуналь хужалыҡ предприятиелары яҡын арала ГАЗЕЛЬ микроавтобустарына ла эйә буласаҡ.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡаланың генераль планын тормошҡа ашырыу проблемалары тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, Өфөнөң майҙаны 20 мең гектар тәшкил итә. Хәҙер Өфө ярымутрауында торлаҡ райондар төҙөү мөмкинлеге сикләнә бара. Киләсәктә баш ҡала округы биләмәһе Өфө ярымутрауынан Ағиҙел һәм Ҡариҙелдең аръяғында йәйелдереләсәк. Ағиҙел аръяғында - 6 млн. кв метр, Ҡариҙел аръяғында 2,4 млн кв метр торлаҡ фонд төҙөләсәк. Төп бурыс - был биҫтәләрҙе тиҙ һәм өҙлөкһөҙ хәрәкәт магистрале менән тәьмин итеү.

✓Ғафури урамында урынлашҡан 25/1 һанлы йортта Рафаэль Сафинға мемориаль таҡтаташ асылды. Билдәле шағирға 16 февралдә 80 йәш тулыр ине. Ошо дата айҡанлы Өфөлә Рафаэль Сафин иҫтәлегенә арналған ижади кисәләр һәм спектаклдәр үтәсәк.

✓"Вся Уфа" телеканалы Башҡортостан Президенты менән "Тура бәйләнеш" тапшырыуы үткәргәндә өфөләләр Блюхер урамындағы 18-се дауахана яғына пассажирҙар транспорты йөрөмәүе тураһындағы зарын белдереп шылтыратҡайны. Мәсьәлә Өфө ҡала округы хакимиәтендә ҡаралды һәм оператив рәүештә хәл ителде: 27 февралдән 18-се дауаханаға тиклем 204-се маршрут автобусы йөрөй башланы, ә 218-се һәм 222-се автобустар маршруттары шулай уҡ дауаханаға тиклем оҙайтылды.

✓Тәмәке тартыуҙың зыяны тураһында әүҙем яҙышҡан журналистарға "Һаулыҡ һәм үҫеш" фонды һәм Рәсәйҙең тәмәкегә ҡаршы коалицияһы стипендия бүлергә ҡарар итте. Дәғүә итеүселәр бер нисә йүнәлештә проекттар һәм ғаризаларын республиканың Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығына konkurs.tabak@gmail.com адресы буйынса 2012 йылдың 15 мартына тиклем ебәрергә тейеш.

АФАРИН!

# РӘМИ РУХЫ...

## берләштерә, уйға һала

**Рух байрамы итеп ойоштороҙо Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты республика кимәлендәге "Ғарипов уҡыуҙары" фәнни-ғәмәли конференцияһын. Сарала ҡатнашыусы әҙиптәрҙең, башҡорт баҫмаларының баш мөхәррирҙәренең шағир ижады тураһында сығыш яһауы, хәтирәләре менән уртаҡлашыуы ла ошо рухи мөхиткә мәртәбә, йылылыҡ өҫтәне.**

Килгән ҡунаҡтар төрлө секцияларға бүленеп, республика райондарынан, Өфөнөң башҡа мәктәптәренән килгән уҡыусы балаларҙың бөйөк шағир ижадына арналған сығыштарын тыңланы һәм баһаланы. Сығыштарҙа балаларҙың шағирға оло һөйөүен, сикһеҙ хөрмәтен тойоп бер шатланылһа, уларҙың был сараға етди әҙерләнеп, фәнни һәм ижади эҙләнеүҙәр аша ниндәйҙер һүҙ әйтергә ынтылыуы, һығымталар яһауы тағы ла һөҡландырҙы. Фәнни-ғәмәли конференцияның форматы ярыш төҫө алып, сығыштарға баһа һәм урындар бирелһә лә, уларҙың һөҙөмтәһенә әллә ни иғтибар ҙа итмәне шикелле балалар. Улар өсөн был сарала ҡатнашыу, бөйөк шағир тураһындағы фекерен яңыратыу мөмкинлеге алыу, тиҫтерҙәре менән үҙ-ара аралашыу мөһимерәк иконен аңлауы ауыр түгел ине. Ҡыҫҡаһы, "Рәми рухы берләштерә, уйға һала, сәмләндерә, ғәмләндерә, кеше йәшәйешендәге иң юғары ҡиммәт - туған телгә, туған халҡына, тыуған еренә оло мөхәббәт тойғоһон тәрәнәйтә, күңелдәргә мәңгелеккә уя", тигән хәкиҡәттең тантанаһы булды был сара.

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында тағы бер матур йола бар. 1994 йылда уҡыу йорто Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов исемендәге премия булдыра һәм уны йыл да бер әҙипкә һәм уҡыусы балаға тапшыра килә. Шул ваҡыттан бирле был мәртәбәле бүләккә яҙыусыларыбыҙ Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбаев, Мәрйәм Бураҡаева, Таңһылыу Ҡарамышева, Тимер Йосопов, Мирас Иҙелбаев, Факиһа Туғыҙбаева, Ләлә Биишева, Зөһрә Бураҡаева һәм башҡалар лайыҡ булған. Быйыл иһә премия ун кешегә - шағирә Зөһрә Ҡотлогилдинаға, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваға, гимназия уҡытыусылары Әлмира Абдуллинаға, Фирҙәүес Ҡотлогилдинаға, уҡыусылар Миңлегөл Хәсәнова, Сабина Күсәева, Айназ Низаметдинов, Азамат Ишмырҙиндарға тапшырылды. Премия лауреаты тигән исем менән бергә бөйөк шағирҙың йәшәү мәғәнәһенә әйләнгән һәм көрәшкә рухландырған бурыстар - тыуған ер һәм туған тел өсөн яуаплылыҡ бурысы тағы ла тосораҡ булып ятты индәргә. Һәр хәлдә, лауреаттар быны шулай ҡабул итте.

- Нисәмә йылдар буйы, йәшлек ваҡытынан алып, ошо оло шәхестең һынын, исемен, биргән һабаҡтарын, һәр әйткән аҡылын, фекерен йөрәгемдә йөрөттөм, ғүмерем буйы уға лайыҡлы уҡыусы булырға ынтылдым, уның әйткәндәрен, васыяттарын һәр осраҡта бөгөнгө заман йәштәренә еткерергә ынтылдым, - тине үҙенең сығышында Гөлфиә Мөхәмәтгәрәй ҡыҙы Янбаева. - Беҙ, Рәми Ғариповты күреп белгән, сығыштарын тыңлаған, аралашҡан, әҙәрлекләнеүенә шаһит булған 60-сы, 70-се йылдар йәштәре, уның "Туған тел" шиғырын ятлап алып, уны йәшерен генә, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа йәштәргә, балаларға һөйләп йөрөнөк. Ул заман өсөн был үҙенә күрә бер батырлыҡ та булғандыр. Хәҙер инде ул шиғырҙы сәхнәләрҙән һөйләйҙәр, шул шиғыр менән асыла балаларыбыҙҙың теле. Әле ҡайһы әҙиптең бер генә шиғыры менән үҙенә мәңгелек һәйкәл ҡуйғаны бар! Тимәк, Рәми Ғарипов бөйөк яҙмышлы шағир...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Марат Кинйәкәев үҙенең сығышын шағирҙың "Дон-Кихот монологы" әҫәренә арнаны. "Һәр кем аҙ ғына булһа ла Дон-Кихот" тигән фекер үткәрелә был әҫәрҙә. Был фекерҙе ҡеүәтләп, Марат та:"Мин дә үҙемдә саҡ ҡына булһа ла Дон-Кихот һәм саҡ ҡына булһа ла Рәми Ғарипов тип иҫәпләйем. Туған тел, тыуған ер өсөн көрәш минең дә йәшәү маҡсатыма әйләнә бара, ә был маҡсаттың йөрәккә инеп урынлашыуына, әлбиттә, Рәми ағай әҫәрҙәре сәбәпсе..." тигәйне. Был һүҙҙәргә аңлатма кәрәкмәйҙер.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**



Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаттары.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХӘСТӘРЛЕКТӘР...

## балаларыбыҙ уҡыһын өсөн

**Баш ҡалала балаларҙы мәктәпкәсә белем биреүгә йәлеп итеү кимәле 2012 йылдың башында 70 процент тәшкил иткән. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Сынтимер Баязитов хәбәр итте.**

Балалар баҡсалары тураһында. Өфөлә дәүләт ҡарамағында булмаған балалар баҡсалары булдырыла. Бөгөнгә шундай 8 учреждение эшләп килә. Ғаилә тәрбиәһенә алынған төркөмдәрҙең һаны арта. Әлегә Өфөлә 47 төркөмдә 146 бала шөғөлләнә. "Мәктәпкәсә белем биреүҙең төрлө формаларын үҫтерәбеҙ. Хәҙер ата-әсәләрҙең балаларын баҡсала көнөнә 3-5 сәғәткә генә ҡалдырыу мөмкинлеге лә бар. Бөгөнгә шул рәүешле 700 бала тәрбиәләнә. 1,5-2 йәшлек балалар баҡсаларына йөрөмәгән сабыйҙарҙың ата-әсәләренә компенсация түләнә", - тине Сынтимер Биктимер улы.

Баш ҡала предприятиеларға ҡараған балалар баҡсалары ла бар. Шундай 6 учреждениела урындар 82 процентҡа ғына тулған. "Муниципаль балалар баҡсаларына сиратта тороусыларға ошо учреждениеларҙан урын тәҡдим итәсәкбеҙ, - ти Сынтимер Биктимер улы.- Бөгөн предприятиелар менән килешеү тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла. Ҡабул итеү шарттары муниципаль баҡсаларҙан айырылмаясаҡ".

Мәктәптә ата-әсә үҙе һайлай. Өфө мәктәптәре лә беренсе сентябрҙән төп эш йүнәлешен яңы белем биреү стандарттарына ярашлы көйләп алып бара. Өфөнөң 25 мәктәбе тәжрибә рәүешендә яңы стандарттарҙы икенсе синыфтан, ә тағы ла 8 мәктәп өсөнсө синыфтан индергән. Һәр ата-әсә балаһын үҙе теләгән мәктәпкә бирә ала, уның һайлау мөмкинлеге бар. Шул уҡ ваҡытта һәр мәктәпкә билдәле бер биҫтә, йорттар беркетелгән. Мәктәп тәү сиратта үҙ биҫтәһенә ҡараған балаларҙы ҡабул итергә бурыслы. Урындар ҡалһа ғына башҡаларҙы ҡабул итә алалар. "Кире осраҡта мәғариф хеҙмәткәрҙәре законды тупаҫ боҙа, тигән һүҙ. Быны беҙ ҡаты күҙәтеү аҫтында тотабыҙ", - тип белдерҙе баш ҡаланың мәғариф бүлеге начальнигы Азамат Сәйфуллин. Ҡалаға өҫ мәктәп иһә үҙе теләгән уҡыусыларҙы ҡабул итә ала. Унда ҡатмарлыраҡ программа буйынса белем бирелә. Бынан тыш, дәүләт ҡарамағында булмаған түләүле 4 мәктәп эшләп килә. Унда биш йөҙҙән артыҡ уҡыусы белем ала.

Видеокүҙәтеү урынлаштырылған. Бөгөн Өфө мәктәптәрендә заманса ҡорамалдар ҡулланылыуға әүҙем индерелә. Ашханаларҙа электрон терминалдар ҡуйылған. Һәр баланың электрон пластик картаһы бар. Уҡыусылар тукланыу өсөн ошо карталар буйынса түләй. Тиҫтәгә яҡын мәктәптә турникет бар. Уның аша мәктәпкә магнит картаһы булған уҡыусылар, хеҙмәткәрҙәр, ата-әсәләр генә үтә ала. Ә 125 уҡыу йортонда видеокүҙәтеү ҡорамалдары урынлаштырылған.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



### Һағыҙ сәйнәү

Баш мейеһенең ҡан әйләнешен яҡшыртыу өсөн шырышы, ҡарағай һағыҙын сәйнәргә кәрәк. Һаулыҡ өсөн ауыр тип һаналған көндәрҙә айырыуса файҙалы.

### Тамырҙар киңәйгәндә

350 грамм бал һәм 250 грамм ҡырылған һарымһаҡты бер аҙна тонәтеп, көнөнә 3 мәртәбә ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу бер нисә ай дауам итә.

Яралар булмаһа ла, тамырҙар төйөнләнеп торған урынға 3-4 сәғәт һайын сей помидор киҫәктәрен бәйләп торорға.

### Танау өшөһә

2 ҡалаҡ кипкән йүкә сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 20-30 минут төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 2-3 мәртәбә танау тирәһенә һөртөргә.

2 ҡалаҡ аҡ сәскәне (ромашка) 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм компресс яһарға.

### Сикаҡлау яфалаһа

Шәкәр һурырға кәрәк.

### Киҙеүгә ҡаршы

Лимонды 5 минутҡа ғына ҡайнар һыуға һалып алырға ла, ит турағыстан ҡабығы менән үткәрергә. Шуға 100 грамм һыйыр майы һәм 1-2 ҡалаҡ бал ҡушып болғатырға. Киҙеү көсәйгән осорҙа шуны аҙ-аҙлап ашарға. Был май ғәҙәттәгесә һаҡлана.

Шулай уҡ һарымһаҡ ашарға ла онотмағыҙ.

### Быума йүтәл

Бер баш һарымһаҡты иҙергә һәм бер стакан һөттә ҡайнатып, көнөнә бер нисә тапҡыр эсергә.

### Эсеүҙе ташлайым, тиһәң...

Яңы ғына ҡаҙып алынған сельдерей тамырының һутын ай буйы ашар алдынан көнөнә 1-2 ҡалаҡлап эсергә кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Өфөлә спорт мәктәп-интернаты (комплексы) төҙөү кәрәк, тип табылһа, уны ҡала эсенә түгел, ситтә, урманлы, таулы, физик әҙерлек өсөн бөтә шарттар булған, экологик яҡтан таҙа урынға проектларға кәрәк.



ҺАБАҠТАР



# ҒҮМЕР БУЙЫ ӨЙРӘНӘБЕҘ

## Әйт, ауылым, ҡайҙа һуң моң...

**Урамдан китеп барам. Мини юбка кейгән буш биҙрәле ҡыҙ юлымды ҡыйып үтте. Ауыҙында - һағыҙ, ҡолағында наушниктар...**

Ҡапыл бер ваҡиға хәтеремә килеп төштө. Яурыныма көйәнтәләр элеп һыуға сыҡтым. Ғәҙәттә, урамға сығыу менән ике яҡты ҡарап ала торғайным - кеше-маҙар килә ятмаймы? Юғиһә, юлын ҡыйып ҡуйыуың ихтимал. Ә был ауылда ҙур тәртипһеҙлек иҫәбендә. Беҙгә һыуға барыу өсөн урам аша сығырға кәрәк. Был юлы, нишләптер, үр яҡҡа ғына күҙ һалғанмын, бары тик тыҡрыҡҡа инер алдынан ғына түбән яҡҡа ҡараным. Һәм... ултыра төшә яҙҙым. Туй килә ята. Ап-аҡ күлдәкле кәләш менән кейәү алдан төшөп алған. Етеп кенә киләләр. Загсҡа китеп барыуҙары инде. Ул ваҡытта ауыл советында теркәй торғайнылар никахты. Өҫтөмә бер биҙрә һыуыҡ һыу ҡойҙолармы ней! Бер мәлгә генә аптырап ҡалдым да тыҡрыҡҡа төштөм дә киттем. Унан йылғаға ҡарап аяғым ергә теймәй елдерҙем. Йылғаны аяҡ кейемем менән кисеп, көйәнтәлә килеш кенә биҙрәләремә һыу һоҫоп алдым да, тулы биҙрәләр менән кире йүгерҙем. Шөкөр, ғаилә ҡороусыларҙың алдынан ғына тиерлек тулы биҙрәләремде мөлдөрәтеп кире үттем... Өҫтөмдән йөк төшкәндәй булды. Тик был йәштәрҙең никахы оҙаҡҡа барманы, малайҙары атайһыҙ үҫте. Нишләптер, ошо ваҡиға иҫемә килә лә төшә. Әллә мин юлдарын ҡыйғанға йәшәй алманылармы икән, тигән уй, ул тиклем үк борсомаһа ла, бәғзе бер мәл килеп китә...

...Ә теге ҡыҙ машинамдың тормозона сыйылдатып баҫҡас ҡына моңһоҙ күҙҙәре менән миңә әйләнеп ҡараны. Уйҙары, булмышы менән әллә ҡайҙа ине шикелле. Йомошомдо йомошлап, кире әйләнгәндә, ул ҡыҙ йәнә осраны. Көлә-көлә үҙ алдына һөйләнә ине. Дөрөҫөрәге, наушниктары аша кем менәндер һөйләшә. Был юлы юл биреп баҫып ҡалды. Ҡулындағы биҙрәләренә күҙ һалдым - күнәктәрендә һыу яртылаш ҡына.

Үҙебеҙҙең бала саҡ иҫкә төштө тағы. Көйәнтәләп, һығыла-бөгөлә һыуҙы әҙ ташыманыҡ. Өйгә, йәшелсәгә, малға, мунсаға... Мөлдөрәмә күнәктәрҙе сайпылтмаҫ өсөн, кәүҙәне һығылдырып-бөгөлдөрөп, үҙебеҙсә йөҙҙөрөп кенә атлаған саҡтар бар ине шул... Һәүәнәктең һыуына мөрхәтһенмәй, йылға аръяғындағы тау төбөндәге шишмәгә лә барып етәбеҙ. Эй, ул шишмә һыуының тәмлелеге, таҙалығы. Ҡояшлы көндә биҙрә эсендә әллә ниндәй нурҙар уйната-уйната алып ҡайта инек был гәлсәр кеүек һыуҙы. Һыуҙан ҡайтҡанда бөтә ғәм биҙрәләрҙә - сайпылып ҡуймаһын, мөлдөрәмә тулы килеш кенә алып ҡайтҡанды күреп, әсәйҙәр маҡтаһын.

Беҙгә тиклем дә ташығандар. Оләсәйҙәр һөйләүенсә, ҡыҙҙар һыуға сыҡһа, егет-еләндең аты "һыуһай" башлаған - ат эсерә төшкәндәр. Шул һыу юлында әллә күпме яҙмыштар бәйләнгән, уртаҡ бәхеттәр яҙылған, йөрәк серҙәре асылған...

Әлеге ҡыҙҙы йәлләп ҡуйҙым: һыу буйындағы таллыҡта һайраған ҡош моңдарын да, таштан ташҡа һикереп, сер һөйләгән тулҡындар тауышын да ишетмәй бит ул. Көйәнтәгә эленгән биҙрәләрҙең сыңында ла көй ишетелгән һымаҡ була торғайны беҙгә. Һәүәнәк буйына төшкәс, бер гилке ҡаршы тауҙағы ҡайындарға, яр ситендәге таштарға һоҡланып торғаным хәтергә төшкәс, яманһыу булып китте. Кеше һаман тәбиғәттән алыҫлашыу өҫтөндә шул. Күңелгә шиғыр юлдары килә:

*Кеше хәҙер һуҡмаҡ ярмай,*
*Ярылғанынан бара.*
*Шыма булһын, ялтлап ятһын*
*Бара торған юл-ара.*
*Кеше хәҙер мәке уймай,*
*Аға һыуҙар өйөндә.*
*Шуға улар ишетмәйҙәр*
*Йылға-шишмә көйөн дә.*
*Кеше хәҙер… Барыһы әҙер…*
*Ыҙаларға ла түгел.*
*…Тик һағыштан һыҡрап ҡуйҙы*
*Йәшереп кенә күңел.*

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ШУНДАЙ ТӘҠДИМ БАР!



# ВАҠЫТЛЫСА СИГЕНӘЙЕК ТӘ...

## үҙебеҙҙең спортсыларҙы әҙерләйек

**Һуңғы йылдарҙа "Салауат Юлаев" хоккей командаһында үҙ тәрбиәләнеүселәре уйнамай тиерлек. Белеүегеҙсә, командала башлыса ситтән килгән уйынсылар тупланды. Был хәл - үҙебеҙҙең тәрбиәләнеүселәр булмауы, булғандарының да ситтә йөрөүе беҙҙе борсомай ҡалмай, әлбиттә.**

Һүҙ юҡ, командаға ситтән көслө уйынсылар килеүе төрлө планлы звенолар тупларға булышлыҡ итә. Ләкин һәр нәмәлә сама булырға тейеш. Беренсенән, "йондоҙҙарҙы" туплау ҙур финанс сығымдары талап итә. Икенсенән, урындағы хоккей мәктәбе тәрбиәләнеүселәренең ситкә китеүе алмаш әҙерләүсе тренерҙарҙың эш һөҙөмтәлелеген дә, уларҙың дәртен дә һүндерә. Өсөнсөнән, урындағы тәрбиәләнеүселәрһеҙ алтын миҙал яулау күңелгә бер юшҡын булып ята, артыҡ кинәнес тыуҙырмай. Ул тотош республикаға ла мәртәбә өҫтәмәй.

Совет осоронда Мәскәүҙең ЦСКА командаһының төрлө ҡалаларҙың уйынсыларын туплап, алтын миҙал яулауы бөтә Рәсәйҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙыра торғайны. Шулай булһа ла команда составында бер нисә үҙ уйынсыһы бар ине.

"Ишмәтов"осоро көйәрмәндәрҙең хәтерендәлер. Башлыса "Салауат Юлаев" хоккей мәктәбе тәрбиәләнеүселәренән торған команда өс тапҡыр бронза миҙал яулауға өлгәште. Алтын миҙал булмаһа ла, был бик һәйбәт күрһәткес ине. Ул ваҡыттарҙа ла команда матур, сағыу уйындар күрһәтте. Мәскәүҙең "Спартак" командаһынан тыуған ҡалаһына ярҙамға ҡайтҡан Сергей Бушмелевтың ҡапыл вафат булыуы, иптәштәре Александр Смак, Рауил Хәйҙаровтың - "Динамо", Игорь Кравчуктың ЦСКА командаларына күсеүе, Дмитрий Денисовтың сит илгә, һуңынан Череповецтың "Северсталь" командаһына китеүе, хәл иткес уйындарҙа мәрәйҙәр туплауға булышлыҡ итерлек уынсыларҙың етерлек булмауы ғына Рафаэль Ғәзиз улы Ишмәтовҡа кәм тигәндә көмөш миҙал яулауға ҡамасауланы.

Ут күрше Силәбенең "Трактор" командаһы бер ҡасан да ситтән күпләп уйынсылар йыйыу менән мауыҡманы. Уның хоккей мәктәбе һәр ваҡыт Рәсәйҙә көслөләр иҫәбендә булды. Совет осоронда, юғары лигала ун ғына команда уйнағанда, "Трактор"ҙың башлыса үҙҙәренең тәрбиәләнеүселәре менән бронза миҙал яулауы күп нәмә тураһында һөйләй. Ул ваҡытта хәҙер суперлигала сығыш яһаған күпселек командаларға "юғары лига" хыял ғына ине. Үкенескә ҡаршы, "Трактор" командаһы финанс ҡыйынлыҡтар кисереү сәбәпле үҙ тәрбиәләнеүселәренең күбеһен юғалтты һәм бер нисә миҙгел суперлиганан төшөп ҡалғайны. Хәҙер "Трактор" командаһы тәжрибәле тренеры Валерий Белоусов етәкселегендә ҡабат үҫеш юлына баҫты. Уларҙың яҡын киләсәктә ниндәй булһа ла миҙал яулаясағына шик юҡ.

"Салауат Юлаев" хоккей клубының балалар, үҫмерҙәр мәктәбе сағыштырмаса яҡшы эшләһә лә, төп командаға көслө уйынсылар әҙерләүҙең икенсе юлдарын эҙләргә ваҡыт күптән еткән. Өҫтәүенә, республикала киләсәктә футболды үҫтереү буйынса ла бурыстар ҡуйыла. Тимәк, футбол буйынса лайыҡлы алмаш әҙерләү мәсьәләһе лә киҫкен торасаҡ. Былар - миҙалдың бер яғы. Икенсе яҡтан, республика ауылдары хоккей һәм футбол буйынса белгестәргә мохтажлыҡ кисерә. Шуға күрә Өфөлә спорт йүнәлешендә республика мәктәп-интернаты (комплексы) асыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Был сара "Салауат Юлаев" хоккей һәм "Уфа" футбол командаларына алмаш әҙерләүҙә етди конкуренция тыуҙырыр ине.

Спорт комплексын асҡан хәлдә, унда тренерҙар булып башлыса шул уҡ "Салауат Юлаев"та, "Уфа"ла уйнап, ҙур спорттан киткән уйынсылар эшләр, улар өмөтлө малайҙарҙы район, республика масштабтарында үткән төрлө турнир-ярыштарҙа һайлап алыр ине. Тәрбиәләнеүселәрҙең барыһы ла төп командаларға эләкмәҫ, әлбиттә. Уларҙың күпселеге 11-се синыфты тамамлағас, спорт йәки икенсе йүнәлештәрҙәге һөнәр алып, квалификациялы белгес булып кире ауылға ҡайтасаҡтар. Ауылдарҙа эскелектең киң таралыуы берәүгә лә сер түгел. Ошо яуызлыҡҡа ҡаршы көрәштә физкультура һәм спортты әүҙемләштереүгә шарттар тыуҙырыу мөһим роль уйнаясаҡ. Был юҫыҡта ваҡытты юғалтыу ҙур спорт өсөн дә, ауыл өсөн дә отошло түгел.

Өфөлә спорт мәктәп-интернаты (комплексы) төҙөү кәрәк, тип табылһа, уны ҡала эсенә түгел, ситтә, урманлы, таулы, физик әҙерлек өсөн бөтә шарттар булған, экологик яҡтан таҙа урынға проектларға кәрәк. Мәҫәлән, ул "Биатлон" спорт комплексы янында проектланһа, бында тотош спорт ҡаласығы барлыҡҡа киләсәк.

Хоккей-футболға бер урында комплекс асыу иҡтисади яҡтан да отошло буласаҡ. Тренерҙарға ла кемдең нимәгә һәләтле булыуына ҡарап, малайҙарҙы футболдан хоккейға йәки киреһенсә алмаштырырға уңайлы буласаҡ. Сөнки бөтә процесс күҙ алдында була бит. Әгәр ҙә комплекс "Биатлон" базаһында төҙөлһә, ауыл малайҙарын биатлонға йәлеп итеү форсаты ла тыуыр ине. Өс таған ныҡлыраҡ була.

Килеп тыуған дөйөм хәлде иҫәпкә алып, яҡын киләсәк миҙгелдәр уйындарына яратҡан "Салауат Юлаев" командаһына ниндәй ҙә булһа миҙал алыу бурысын ҡуймау маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Командаға әкренләп урындағы тәрбиәләнеүселәрҙе йәлеп итеүҙе арттырырға мөмкинлек тыуыр ине. Команда 10-15-се урындарға төшкән хәлдә лә яр һалырға кәрәкмәй. Шуныһы шарт: суперлиганан ғына төшөп ҡалмаһындар.

Ваҡытлыса артҡа сигенеп тороу тактикаһы була торған хәл. Республикала булған мөмкинлектәрҙе интенсив йүнәлешкә ҡуйып, көс тупларға кәрәк. Ә миҙалдар тағы булыр, сабырлыҡ күрһәтеп, уларҙы һуңғараҡҡа, киләсәккә ҡалдырыу маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

**Азамат КҮСӘЕВ.**
**Учалы районы.**

✓ **"Был оҡшашлыҡ культураның бөтә һыҙаттарында ла сағыла. Һөҙөмтәлә VIII-IX быуаттарҙа Урал аръяғы райондарында башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән, тигән фекергә килә алабыҙ".**



*ШАҢДАУ*

# ҒАЛИМДЫҢ СӘЛӘМЕ...

## Хөсәйен убаһын иҫкә төшөрҙө



**Тарих фәндәре докторы, профессор Нияз Мәжитовтың: "Тағы бер дәлил... баш ҡаланың йәшен билдәләй" ("Киске Өфө", 2012, № 2) тигән мәҡәләһен уҡып, ҙур кинәнес, шатлыҡ кисерҙем.**

"Ошо көндәрҙә Австралиянан шундай хәбәр килде: 3,5 метр ҡалынлыҡтағы мәҙәни ҡатламдарҙың аҫҡы өлөшөнән алған бер проба анализы 570-се йыл, йәғни V-VI быуат менән билдәләнә. Австралиянан килгән хәбәр иң теүәл дәлил булып тора", - ти профессор. Шунан ул: "Киске Өфө"нө алдырған, уҡыған уҡыусыларҙы ошо ҡыуаныслы яңылыҡ менән ҡотлайым!" - тип сәләм ебәрә. Сәләмендә ҡабул иттек, Нияз Ғабдулхаҡ улы. Рәхмәт Һеҙгә! Ғүмерегеҙ буйы эҙләнеүҙәрегеҙҙе дауам итәһегеҙ һәм һөҙөмтәһенә өлгәшәһегеҙ. Быға бер миҫал килтермәксемен.

1965 йылдың йәй башында Нияз ағай Мәжитов беҙҙең Әбйәлил районының Хәлил урта мәктәбендә булды, музейыбыҙҙы ҡараны. Аҙаҡ "Башҡортостан археологияһы" тигән китабында "Хөсәйен убалары" башы аҫтында беҙҙең яҡтарҙағы эҙләнеү-тикшеренеү һөҙөмтәләре тураһында шулай тип яҙҙы: "Хөсәйен ҡәберлеге 12 убанан тора, ул Әбйәлил районының Хөсәйен һәм Шаҙығай ауылдары араһында Ирәндек тауының көнсығыш итәктәрендә ята. 1965 йылда шул уҡ райондың Хәлил урта мәктәбе уҡыусылары хазина эҙләү маҡсатында бер убаны ҡаҙып та ҡараған, ләкин уларға кеше булынан һәм ат һөлдәһенән башҡа бер нәмә лә табылмаған. Ҡомарҡыны беҙ уҡыусыларҙың ана шул "тикшеренеү" эҙҙәре буйынса таптыҡ та инде". Был уҡыусылар тыуған яҡты өйрәнеү түңәрәге ағзалары ине. Бер мәл улар Хөсәйен ягынан экскурсиянан ҡайтып килгәндә унда-бында һибелеп ятҡан, ҡасандыр аҡтарылған-ҡаҙылған убаларға тап була. Тирә-яғын ҡарап йөрөй торғас, кеше һәм ат баштары һөлдәләренә тап булалар, был турала гәзиткә яҙып сығалар. Уҡыусылар ундай урындарҙы үҙ белдектәре менән ҡаҙырға рөхсәт юҡлығын, бындай эштәрҙе археологтар етәкселегендә генә башҡарып була икәнен бик яҡшы белә ине. Нияз Ғабдулхаҡ улы беҙгә килгәс, ул ваҡыттағы мәктәп директоры Әмир Шөгөров миңә: "Әйҙә, был эште "башлаған" класың (IX класс етәксеһе инем) археолог иптәшкә ярҙам итһен", - тине. Шулай итеп, беҙҙең малайҙар өс көн буйы ғалим менән бергә убаларҙы тикшерҙе, ярҙам итте.

Эҙләнеү-тикшеренеү эштәре тураһында ғалим аҙаҡ ошолай тип яҙҙы: "Убалар үҙҙәренең төҙөлөшө һәм материалы яғынан VIII-IX быуат убаларын ҡабатлай, тик күләме яғынан иң ҙур булған ун икенсе уба ғына бик бай һәм оригиналь табыштар бирҙе. Был убала барлығы дүрт ҡәбер соҡоро табылды, ләкин уларҙың өсөйһе элек бик нык аҡтарылған булған. Дүртенсе ҡәберҙә аҫлы-өҫлө күмелгән ике кеше һөлдәһе сыҡты. Өҫтәге һөлдә ҡатын кешенеке ине. Ул салҡан төшөп, башы менән төньяҡҡа ҡарап ята. Уның баш осона ике балсыҡ көршәк ҡуйылған..." Артабан ғалим был ҡәберҙә табылған ҡомарҡыларҙы тасуирлап яҙа. Һөлдә эргәһендә көмөш алҡалар, муйынсаҡтар, баҡыр тәңкәләр, бронза сылбыр, сулпы һ.б. табылыуын билдәләй. "Егерме сантиметрға тәрәнерәк күмелгән һөлдә ир кешенеке булып сыҡты, - тип яҙа ғалим.- Уң яғында тимер сүкеш һәм көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән ҡайыш һыҙып һалынған. Был ҡайыш билендә лә бар. Сираҡ һөйәктәре араһында ике өҙәнге һәм ауыҙлыҡ табылды... Был ҡәберҙән сыҡҡан бөтә табылдыҡтар VIII-IX быуаттарҙа эшләнгән. Икенсе бер убала ла ошо ваҡытҡа ҡараған бик күп көмөш табыштар сыҡты..."

Ғалим-археолог Нияз Мәжитов үҙе тапҡан табылдыҡтарҙы ентекле рәүештә өйрәнеп, тикшереп, фотоүрәте менән номерлап бирә китабында һәм ошондай һығымта яһай: "Мораҡай һәм Хөсәйен убалары Көньяҡ Уралдың далалы яҡтарына яҡын ятһа ла, материалы менән VIII-X быуаттарҙа Башҡортостандың урта һәм төньяҡ райондарында йәшәгән башҡорт ҡәбиләләренең ҡомарҡыларына бик яҡын. Был оҡшашлыҡ культураның бөтә һыҙаттарында ла сағыла һәм уны ҡәбиләләрҙең этник берҙәмлектәренән башҡа осраҡлы ғына хәл итеп булмай. Һөҙөмтәлә VIII-IX быуаттарҙа Урал аръяғы райондарында башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән, тигән фекергә килә алабыҙ".

Әшен тамамлағас, тапҡан ҡомарҡыларын өҫтәлдәргә теҙеп һалып, Нияз Мәжитов мәктәбебеҙҙә археология һәм ҡомарҡылар тураһында әңгәмә үткәрҙе, уҡыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе, боронғо убаларға, ҡәберлектәргә бик иғтибарлы булырға, шикле, үҙенсәлекле күренештәрҙе күрһәләр, беҙгә хәбәр итергә саҡырҙы. "Улар - беҙҙең тарихыбыҙ", - тине ул. Беҙ уға Әбделмәмбәт һәм Хәлил, Ишбулды (Ахай) һәм Хәлил араһында ла убаларҙың булыуы, хәҙер инде ул урындарҙың һөрөлөп тигеҙләнеүен әйттек. Тигеҙләнһә лә, был урындарҙы Ишбулды мәктәбе уҡытыусыһы, һуғыш ветераны Мөхәмәтғәлин Әнүәр ағайҙың күрһәтә алыуын хәбәр иттек. Археолог ҡайтып киткәс, беҙ әлеге эҙләнеүҙәр мәлендә табылған табыштарҙың һүрәттәрен ҡағыҙға күсереп, альбом төҙөп, музейға ҡуйҙыҡ.

Бик күп йылдар үтте. Нияз Мәжитов хәҙер ҙур кеше, академик, иҫәпһеҙ-һанһыҙ мәҡәләләре сығып тора, китаптары баҫыла, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре. Әҙме-күпме таныш, күргән кеше булғанға, уның шәхесе беҙгә бик яҡын, ҡәҙерле, үҙебеҙ алдырған гәзит-журналдарҙағы яҙмаларын ҡыҙыҡһынып уҡыйбыҙ. Уның "Башҡортостан археологияһы" тигән китабын (1968 йыл баҫылған) да уҡыусылар менән бергәләп уҡып сыҡтыҡ, ул хәҙер беҙҙең өҫтәл китабына әйләнде. Һаулыҡ һәм уңыштар теләйбеҙ бөйөк ғалимға! Һәм көсө етмәҫлек сәләм күндерәбеҙ!

**Нәғимә ИЛҺАМОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы.**
**Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ДАН ЯНЫНДА МАЛ БУЛҺЫН...

## шунһыҙ ул һанһыҙ

- Ҡара бауыр тыуғандан ялбыр ҡойроҡ эт яҡшы.
- Танау үҙе берәү генә, әммә тишеге икәү - йәнәт еҫкәп өлгөрә.
- Табағында аш булмаһа, алтын ҡалаҡ ялауҙан тамаҡ туймаҫ.
- Аҡса батша булған ерҙә туғанлыҡҡа урын юҡ.
- Бур бурҙыҡын ашай.
- Оҙон еп сейәлә, оҙон тел ғәйбәт йыйып ҡыяла.
- Саҡырылған ерҙән ҡалма - ятҡандар һөйөнһөн, һөймәгәндәр көйөнһөн.
- Сүс еп сейәлеүсән, наҙан түрә бәйләнеүсән.
- Тура һүҙгә атың-тунң кәрәкмәй, бәрә лә йығa.
- Ҡулында власть булғандың өйө бейек, йоҙроғо ҙурҙың ҡыйыш мөрйәһе лә төҙ.
- Гел ауыҙыңды уйлама: ашаған унан һалынып тормай - күҙгә ташланыр нәмәң дә булһын.
- Кешенән көл, әммә тәүҙә үҙеңде бел.
- Барыр ерең, торор өйөң, Иҙел буйы уйың булһын.
- Даның, даның янында малың булһын - малһыҙ дан ул һанһыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# ПЕТР БЕРЕНСЕ МУЗЕЙЫНДА...

## башҡорт коллекциялары

**Санкт-Петербургтағы Антропология һәм этнография академик музейында 100 предметтан күберәк әйбер туплаған ете башҡорт коллекцияһы бар. Уларҙың бында килеп эләгеү тарихы төрлө. Нигеҙҙә, улар Башҡортостанда булып киткән тикшеренеүселәр йәки шәхси кешеләрҙең - мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең, чиновниктарҙың бүләктәре. Улар XIX быуат һуңында - XX быуат башында йыйылған.**

Бер коллекция П.С. Палластың экспедицияһы (XVIII быуат) менән бәйле. XIX быуат башы һәм уртаһы менән билдәләнгән әйберҙәр ҙә бар (П.Н. Небольсиндың бүләге).

Коллекцияның исемлеге Рәсәй Фәндәр академияһы Этнология һәм антропология институты Петербург үҙәгенең көнсығыш славян секторы коллективы тарафынан төҙөлгән һәм Европа бүлеге коллекциялары каталогына индерелгән.

№204. Коллекция бер генә предметтан тора - Ырымбур губернаһынан килтерелгән ағастан эшләнгән сылбыр. Экспонатты 1890 йылда Эрмитаж ҡараусыһы А.К. Марков тапшырған.

№366. 1891 йылда тапшырылған ағастан соҡоп яһалған сүмес.

№ 490. Аслыҡ йылдарында Өфө губернаһында ҡулланылған аҙыҡ-түлек ҡатнашмаһының 28 төрө. 1898 - 1899 йылдарҙа Ҡыҙыл Тәре уполномоченныйы ярҙамсыһы Д.М. Головачев тапшырған.

№766. Академик П.С. Палластың 11 предметтан торған коллекцияһы. Яҡынса 1774 йылдарҙа тапшырылған. Барлыҡ әйберҙәр ҙә идентификацияланмаған. Биҙәүестәрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш кейеменең өлөштәре бар.

№2027. 38 предметтан торған элекке Өфө өйәҙендә башҡорттар, татарҙар, мариҙар ҡулланған тукымалар, баш кейемдәре, аяҡ кейемдәре һәм кейемдәрҙең ҙур коллекцияһы. 1812 йылда гимназия уҡытыусыһы Н.Ф. Арептева тапшырған.

Ирҙәрҙең кейеме лә бар: биҙәкле күлдәк һәм ыштан, еңһеҙ кофта, бишмәт, билбау, бейәләй, баш кейеме, силғауҙар һ.б. Ҡатын-ҡыҙҙар кейеменән: сигелгән алъяпҡыс, ыштан, камзул, өҫкө кейем һ.б.

№2716-25 (а-в). Уҡ һәм ян. 1919 йылда Е.Е. Тевяшовтың шәхси тупланмаһынан тапшырылған.

№ 6576. Рустар, украиндар, Волга буйы һәм Урал алды халыҡтары араһында Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Д.К. Зеленин тарафынан XIX быуат һуңында һәм XX быуаттың тәүге ун йыллығында йыйылған коллекцияла тиҫтәләгән биҙәү-ғәмәли сәнғәт өлгөһөнөң тиҫтәләгән предметы иҫәбендә элекке Екатеринбург губернаһы башҡорттарының сигелгән әйберҙәре (хараустар һ.б.), айырым хеҙмәт һәм шәхси гигиена ҡорамалдары бар. Боронғо әйберҙәр музейға 1965 йылда, билдәле ғалимдың вафатынан һуң тапшырыла.

В.М. Шнейдерҙың коллекцияһында тиҫбе бар (№5324-2).

Рәсәй фарфоры коллекцияһында башҡорт традицион мәҙәниәтен башҡорт милли кейемендәге фигура ла һынландыра (№2335-6).

**Светлана ШИТОВА.**

***✓ Уны саҡырып, беҙҙең егеттәр кавказдарса ут сәсрәтеп ҡылыс алышыр тип уйлағайным, юҡ, барыбер үҙебеҙсә килеп сыҡты. Беҙҙең халыҡта ундай агрессия юҡ, шуға күрә ҡанды алдап булмай.***

# БАШҠОРТСА
## йәки Ниңә башҡорт бейеүсеһенең

**Һуңғы йылдарҙа башҡорт бейеү сәнғәте киң йәмәғәтселектең иғтибар үҙәгенә әүерелде. Быға, бер яҡтан, "Байыҡ" телевизион фестивале булышлыҡ итһә, икенсенән, бейеү сәнғәте өлкәһендә барлыҡҡа килгән ҡайһы бер киҫкен проблемалар белгестәрҙе һәм бейеүселәрҙе борсоуға һалды. Дөрөҫөн әйткәндә, бейеү сәнғәте совет заманынан алып байрам тамашаһы мәлендә генә иҫкә төшөрөлөп, үҙ ағышына ҡуйылған өлкә булды һәм бейеү маһирҙарына ла ҡараш ошо кимәлдән уҙманы. Бейеү айырым сәнғәт төрө итеп ҡаралманы ла кеүек, ул байрам массовкаһына тиңләнде. Шул арала сәнғәтебеҙҙең был төрөндә бихисап проблемалар йыйылып китте. Ошо һәм бейеү сәнғәтенә бәйле башҡа мәсьәләләр хаҡында һөйләшер өсөн, бисмиллаға, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең элекке балетмейстер-консультанты Хашим МОСТАЕВты, Башҡортостандың халыҡ артисы, Стәрлетамаҡ дәүләт бейеү ансамбле етәксеһе Риф ҒӘБИТОВты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директор урынбаҫары Сулпан АСҠАРОВАны, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең элекке солисы Филүс ҠАҘАҠБАЕВты әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**▸ "Байыҡ" телевизион конкурсының үткән йылдың аҙағында сәхнәләштерелгән Гала концертын ҡараған ваҡытта тамашасы профессиональ коллективтар сығышына ҡарағанда үҙешмәкәр конкурсанттарҙың сығышын йылыраҡ ҡабул иткәне һиҙелде. Был хәл профессионаллек менән халыҡсанлыҡ араһында ҙур айырма барлығын күрһәтә. Әйткәндәй, был хәл бер бейеү сәнғәтенә генә ҡағылмай, йыр, ҡурай сәнғәтендә лә бар был айырмалыҡ. Нисек уйлайһығыҙ: бейеү сәнғәтендә халыҡсанлыҡ менән профессионаллек айырылырға тейешме? Әллә халыҡсанлыҡтың булмауы профессионаллектең түбән кимәленә ишарамы? Һеҙ халыҡсанлыҡ менән профессионаллек айырмаһын ниҙә күрәһегеҙ?**

**С. АСҠАРОВА:** Һәр бер халыҡтың бейеүендә уның рухы, көнкүреше, характеры сағылырға тейеш. Беҙҙең ундай бейеүҙәребеҙ күп. Минеңсә, халыҡсанлыҡ менән профессионаллек айырылырға тейеш түгелдер. Шуға күрә "Байыҡ" телевизион конкурсының да төп маҡсаты халыҡ араһындағы бейеүҙәрҙе профессиональ сәхнәгә күтәреүгә ҡайтып ҡала. Ауылдарҙа, район үҙәктәрендә, республика ҡалаларында бер ниндәй ҙә махсус белеме булмаған бейеү һалыусылар бар. Уларҙың темалары, идеялары бик матур. Әммә бейеүсе нисек кенә килешле баҫмаһын, үҙен тотмаһын, һәр бейеүҙең драматургияһы булыуы ла фарыз. Бының өсөн инде профессионаллек, махсус белем талап ителә. Конкурста беҙ халыҡ араһында тыуған, йәшәгән ана шундай бейеүҙәрҙе, бейеүселәрҙе һәм уларҙы ҡуйыусыларҙы профессиональ кимәлгә еткерергә тырышабыҙ ҙа инде. Әммә бында тик беҙҙең тырышлыҡ ҡына аҙ. Фестивалдең инициативаһын профессиональ бейеү ансамблдәре, филармониялар күтәреп алһын ине. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт филармонияһы бейеүселәренең репертуарында, нишләптер, яңы бейеүҙәр юҡ. Унда, ғөмүмән, бейеү сәнғәте үҫешмәй, туҡталып ҡалған кеүек.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Фәйзи Ғәскәров яңы бейеүҙәрҙе халыҡ араһында йөрөп, халыҡтан өйрәнеп, уларға драматургия өҫтәп, йән өрөп, профессиональ сәхнәгә сығарған. Шуның өсөн дә ул ҡуйған бейеүҙәр ҡабатланмаҫ һәм мәғәнәле. Хәҙерге ваҡытта, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай мәғәнәле бейеүҙәр бик аҙ. Мин дә профессионаллек менән халыҡсанлыҡты айырып ҡарау яғында түгелмен. Киреһенсә, профессионаллектең иң юғары баҫҡысы - ул халыҡсанлыҡ.

**▸ Атаҡлы халыҡ бейеүсеһе Мөхәммәт Иҙрисовтың данлыҡлы "Байыҡ" бейеүе халыҡсан бейеүме, әллә профессионаллек өлгөһөмө? Миңә ҡалһа, тамашасыға тәьҫир итеү йәһәтенән был бейеү теләһә ниндәй профессиональ кимәлдәге бейеүҙән дә юғары. Әллә мин яңылышаммы?**

**С. АҠСАРОВА:** Был бейеүҙең уңышы Мөхәммәт ағайҙың актерлыҡ оҫталығына ла бәйле. Ул сәхнәлә килешле хәрәкәттәр яһап бейеп кенә ҡалмай, уның образы менән йәшәй. Уның бейеүендә халҡыбыҙҙың характеры сағыла, шуға күрә лә ул тамашасыға тәьҫир итә. Мин, мәҫәлән, урыҫ бейеүҙәрен бейей алмайым, бейей башлаһам, үҙемде ҡылансыҡ бер ҡыҙыҡай итеп тоям. Ә инде башҡорт бейеүендә образды тоя һәм тамашасыға еткерә аламдыр тип ышанам. Профессиональ бейеү халыҡсан булһын өсөн драматургиянан тыш, унда халыҡтың характеры сағылырға тейеш. Филүс менән килешәм, профессионаллектең иң юғары нөктәһе - ул халыҡсанлыҡ.

**Х. МОСТАЕВ:** Башҡорт кешеһе бейергә ярата, бының менән үҙенең шатлығын башҡаларға еткерергә лә ынтыла. Шуға күрә "Байыҡ" телевизион фестивален мин халыҡ өсөн иң кәрәкле сара итеп күрәм. Мөхәммәт Иҙрисовтың "Байыҡ" бейеүенә килгәндә, был бейеүҙең уңышында Фәйзи Ғәскәровтың да роле ҙур булды. Ғәскәров Иҙрисовтың был бейеүенә профессиональ рәүеш бирҙе. Һәр бер башҡорт бейеүендә башҡорт күңеле, башҡорт рухы, ынтылышы, хыял-маҡсаты булыуы - төп шарт. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлмәһә, ул бейеү башҡорт бейеүе булыуҙан туҡтай. Фәйзи Ғәскәров башҡорт бейеүенең ошо үҙенсәлектәрен ныҡ аңланы, үҙләштерҙе һәм уның барлыҡ бейеүҙәре лә мәғәнәле килеп сыҡты. Әгәр ҙә Фәйзи ағай был мәсьәләгә профессиональ күҙлектән ҡарамаһа, ансамбль дә ойоштора алмаҫ ине. Ул башҡорт халыҡ фольклорын, классиканы яҡшы тоймаһа, бындай академик ансамбль тыумаған да булыр ине. Мин 1939 йылда Башҡорт АССР-ының 20 йыллығында "Зарифа" бейеүенең хөкүмәт концертында тәүге тапҡыр башҡарылыуына шаһит булдым. Бейеү ансамблен төҙөү бик ҙур ауырлыҡтар менән барҙы. Ансамблде тәүҙә залдарға индермәнеләр, репетицияларыбыҙ Луначарский паркында үтә торғайны. Хәҙер инде был йәһәттән башҡорт бейеүенә юлдар асылды, телевидениела фестиваль, меңәр кеше һыйҙырышлы залдарҙа концерттар үтә. Бейеү сәнғәте өсөн был оло ҡаҙаныш.

Тик Фәйзи Ғәскәров нигеҙ һалған академик бейеү ансамблендә башҡорт милли бейеү сәнғәте традициялары дауам итәме һуң? Әгәр ҙә юҡ икән, ни өсөн ул шулай һәм беҙ был тәңгәлдә нимә эшләргә тейешбеҙ? Тамаша ҡылыусы үҙен сәхнәләге бейеүсе хәлендә тоя, уның рухында яна алһа ғына, был сәнғәт халыҡсан һәм профессиональ була ала. Әгәр ҙә беҙҙең академик бейеү ансамблендә был йүнәлештә ниндәйҙер тайпылыштар бар икән, беҙ ул етешһеҙлектәрҙән күмәкләп арынырға бурыслыбыҙ. Был йәһәттән "Киске Өфө" гәзитендәге ошо һөйләшеүҙе мин тәүге ынтылыш тип баһалайым.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** "Байыҡ"ты йыл һайын ҡарап барабыҙ. Унда профессиональ бейеүселәр ҙә, үҙешмәкәрҙәр ҙә ҡатнаша. Шуныһы ҡыуаныслы: унда халыҡ таланттары тарафынан ҡуйылған бик күп яңы бейеүҙәр килеп сыға. Яңы бейеүҙе ҡарау күңелгә кинәнес, рәхәтлек тойғоһо бирә. Ә шул бейеүҙәрҙе профессиональ кимәлгә күтәреп була бит. Бында әҙер материал тәҡдим ителә, Фәйзи Ғәскәров һымаҡ ауылдар буйлап командировкаларға йөрөргә лә түгел. Тик, үкенескә күрә, был мәсьәләгә иғтибар биргән кеше генә юҡ.

**▸ Филүс, шулай ҙа хәҙерге заман шарттарында Мөхәммәт Иҙрисовтың "Байығы" һымаҡ яңы уникаль бейеүҙең тыуыуы мөмкинме? Әгәр ҙә мөмкин булмаһа, ни өсөн мөмкин түгел?**

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Мөхәммәт ағайҙың был бейеүе ҡабатланмаҫ хазина. "Гөлнәзирә", "Зарифа", "Заһиҙә" һымаҡ бейеүҙәр ҙә улар рәтендә. Ул бейеү Мөхәммәт ағайҙың үҙенең характерына тура килә. Уның бейеүен күптәр башҡарып ҡараны, тик барыбер унынса бейей алманы. Хашим ағай әйткән "Зарифа" бейеүе лә бөгөн техник яҡтан юғары кимәлдә башҡарыла, тик тәүге башҡарылыштағы рух етешмәй хәҙер был бейеүгә.

**▸ Риф ағай, мин был һорауҙы иң тәүҙә һеҙгә биргем килә. Әгәр ҙә һүҙ сәнғәтендә һөйләмдәге төрлө телдәрҙәге һүҙҙәр йәнәшлегенә юл ҡуйылһа, хаос башланыр һәм был хәлдең сәнғәт менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмаҫ ине. Миҫалға шундай һөйләмде алайыҡ: башҡорт сәнғәте тәүге һөйөү хистәре менән һуғарылған. Хәҙер инде ошо һөйләмдәге һүҙҙәрҙе төрлө телдәрҙә (сыуаш, урыҫ, мари, татар, башҡорт) килтерәм: Пушкарт искусствоһы первый яратамыш хисләре белән һуғарылған. Башҡорт бейеүенә лә төрлө халыҡтар бейеүҙәренең элементтарын индереү ошондай уҡ парадоксаль мәғәнәһеҙлекте барлыҡҡа килтермәйме? Миҫалға тау халыҡтарының аяҡ осондағы бейеүҙәрен алайыҡ. Улар үҙҙәренсә бейеп йөрөгән ерҙән ҡапыл туҡталып, башҡортса тыпырҙата башлаһа, бар донъя йығылып ятып көләсәк бит. Минеңсә, төрлө халыҡтарҙың бейеү элементтары менән сыбарланған башҡорт бейеүе лә ана шундай көлкөлө хәлдә хәҙер.**

**Р. ҒӘБИТОВ:** Мин улай уйламайым, сөнки кавказлылар беҙҙеңсә тыпырҙата алмай. Мин, мәҫәлән, үҙемдең "Бөркөтстан" тигән бейеүемдә Кавказдарҙың "рубка" элементын файҙаландым. Бейеү башҡортса булһа ла, "рубка" өлөшөн ҡуйыр өсөн үҙемдең дуҫым Дикалу Музакаевты саҡырҙым. Уны саҡырып, беҙҙең егеттәр кавказдарса ут сәсрәтеп ҡылыс алышыр тип уйлағайным, юҡ, барыбер үҙебеҙсә килеп сыҡты. Беҙҙең халыҡта ундай агрессия юҡ, шуға күрә ҡанды алдап булмай.

Икенсеһе - профессионализм мәсьәләһе. Дәүләт ансамблдәрендә халыҡсанлыҡтың юғала барыуы бер беҙгә генә хас күренеш түгел. Һүҙ юҡ, беҙ ауылдарҙан килеп, әллә ни ҡатмарландырмайынса, боронғоса баҫып бейегән апайҙарҙы, ағайҙарҙы яратабыҙ, шул милләттең вәкиле булғас, йөрәгебеҙ менән яратып ҡабул итәбеҙ. Ә бит ундай бейеүҙәр менән генә донъя сәхнәһенә сығып булмай. Шуға күрә хәҙерге профессиональ бейеү коллективтарының маҡсаты - үҙебеҙҙең халыҡҡа ла, донъя тамашасыһына ла оҡшарға тырышыу. Мин бейеүебеҙҙә милли колориттың һаҡланыуы яғында, ул беҙгә һут бирә. Шуға күрә "Байыҡ" телевизион фестивален һәр йәһәттән хуплайым. Тик халыҡсанлыҡ менән профессионаллекте ҡаршы ҡуйырға ярамай.

Мөхәммәт ағайҙың "Байыҡ" бейеүенә килгәндә, ул, ысынлап та, феномен. Мөхәммәт ағай халыҡ араһынан ошо бейеүе менән ансамблгә килгән һәм Фәйзи ағай был бейеүҙе сәхнәләштергән, композиция ҡанунына тура килтергән. Сөнки сәхнәнең үҙ закондары бар. Тәүҙә Мөхәммәт ағай "Байыҡ"ты ун минут самаһы бейегән, Фәйзи ағай уны 2-3 минутҡа ҡалдырған. Әгәр ҙә үҙенә ирек бирһәң, ағайҙа "Байыҡ" ты өс сәғәт бейерлек дәрт һәм дарман бар ине. Беҙ бейеүселәргә, нисектер, беҙҙең күңелде күтәреп, арала буталып йөрөүсе кеше итеп кенә ҡарап өйрәнгәнбеҙ. Ниңә беҙгә Мөхәммәт Иҙрисовҡа ла Рудольф Нуреевҡа ҡараған һымаҡ ҡарамаҫҡа ла, ни өсөн шәхесен шул кимәлгә күтәрмәҫкә һуң әле? Эйе, "Байыҡ"ты бик күптәр бейеп ҡараны, тик береһенең дә иҙрисовса килеп сыҡманы, сөнки Мөхәммәт ағай был бейеүендә үҙен бейене, бейеүе күңеленән сыҡты. Шул уҡ ваҡытта Мөхәммәт ағайҙы икенсе характерҙағы бейеүҙәрҙе бейетеп ҡараһаҡ, килеп сығыр инеме икән?

✓ *Ни өсөн, мәҫәлән, Татарстанда Ғәскәровтыҡы һымаҡ ансамбль килеп сыҡманы? Сөнки башҡорт халыҡ бейеүҙәрендәге халыҡ рухы һәм тарихи йөкмәтке ансамблде академик юғарылыҡҡа күтәрҙе.*



# БЕЙЕЙБЕҘМЕ,
## тыпырҙауынан ат тояғы тауышы ишетелмәй?



**С. АСҠАРОВА:** "Байыҡ"ты башҡарыусы башҡалар Мөхәммәт ағайға оҡшарға ғына тырышты кеүек, әммә барыбер үҙҙәренсә килеп сыҡты. Мөхәммәт ағай арабыҙҙан китеп барҙы, әммә уның менән бергә "Байыҡ" бейеүе лә тарихта ҡалды, тип иҫәпләргә ярамай. Ваҡыты килеп еткәс, ул бейеүҙе башҡарыусы ла табыласаҡ.

**Шулай уҡ хәҙер ҡабатлап ҡуйылған "Өс туған" бейеүе лә тәүге ҡуйылғанға пародия һымаҡ килеп сыға...**

**Р. ҒӘБИТОВ:** Бында ваҡыт һәм киңлек факторы ла мөһим роль уйнай. Элек "Өс туған"-ды, асылда, ауылдарҙың ҡыҫыҡ сәхнәләрендә бейей инеләр. Бына бейеүсе сәхнәлә тора, унан ике метр алыҫлыҡта тамашасы ултыра. Бейеүсенең йөҙөндәге һәр үҙгәреш, мимика тамашасыға бик яҡшы күренә. Шул уҡ "Өс туған"ды йә "Зәһиҙә"не меңдән ашыу тамашасы һыймалы "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында бейеп ҡара! Элек артист менән тамашасы араһында йәнле бәйләнеш бар ине. Ансамблдең программаһын күпселектә күмәк бейеүҙәр тәшкил итеүе лә залдарҙың һәм сәхнәләрҙең ҙурайыуына бәйле.

**Х. МОСТАЕВ:** Эйе, "Байыҡ" ты Мөхәммәт Иҙрисов кеүек бераү ҙә бейей алмаясаҡ, әммә уны үҙенсә ҡуйған һәм бейегән кешеләрҙе тамашасы барыбер көтә. "Байыҡ" конкурсында "Зәһиҙә"не бер ҡыҙ шул тиклем килештереп бейене, әммә профессиональ кимәле түбәнерәк булыуы арҡаһында ул Рәшиҙә Туйсинаға оҡшарға тырышты ғына. Оҡшарға тырышыуҙы пародия тиҙәр, уның сәнғәт менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Әгәр ҙә беҙ бейеүсенән Мөхәммәт Иҙрисовтың "Байығын", Рәшиҙә Туйсинаның "Зәһиҙә"һен генә көтөп ултырһаҡ, башҡорт бейеү сәнғәтенә ҡарата үтә тар ҡараштта булыр инек. Сәнғәттең төп талабы - үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ булыуы. Шуға күрә беҙ был йүнәлештә профессионалдарҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерергә бурыслыбыҙ.

Үкенескә күрә, бөгөн Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамблендә йөкмәткеһеҙ бейеүҙәр күбәйә. Был үҙе үк бейеү сәнғәтендәге башҡорт рухына ҡаршы килә. Ни өсөн, мәҫәлән, Татарстанда Ғәскәровтыҡы һымаҡ ансамбль килеп сыҡманы? Сөнки башҡорт халыҡ бейеүҙәрендәге халыҡ рухы һәм тарихи йөкмәтке үҙенсәлекле рәсемде барлыҡҡа килтереп, ансамблде академик юғарылыҡҡа күтәрҙе. Ансамблдең был уңышын профессиональ кимәлгә күтәрелгән фольклор итеп тә ҡарарға була. Ни өсөн бөгөн беҙҙең республикала профессиональ бейеү сәнғәте үҫешмәй, яңы бейеүҙәр ҡуйылмай һуң? Сөнки беҙҙә Фәйзи Ғәскәров кеүек фольклорҙы, халыҡсанлыҡты тәрән тойған профессиональ балетмейстерҙар юҡ.

**С. АСҠАРОВА:** Бар ундай профессионалдар, тик уларҙың эшмәкәрлегенә йүнәлеш биреүсе идеология, бының менән шөғөлләнеүсе кеше генә юҡ.

**Х. МОСТАЕВ:** Моисеев, Ғәскәров, Войнович, Захаров кеүек профессионалдар үҙҙәре лә балет артистары инеләр. Беҙҙә лә училищела матур итеп бейергә өйрәтәләр, әммә беҙҙә Мәскәүҙәге һымаҡ бейеү театры юҡ. Әгәр ҙә Р. Нуреев исемендәге училищела бейеү театры барлыҡҡа килһә, ул сағында классик бейеүҙәр өсөн дә, халыҡ бейеүҙәре өсөн дә балетмейстерҙар табылыр ине.

**Был турала мин күп тапҡырҙар яҙғаным бар. Һәр бер халыҡ бейеүенең уның боронғолоғон, генетик аңын, рухын сағылдырған магик көсө була. Беҙҙең халыҡтың ундай көсө бейеү менән бер рәттән ҡурай моңона, боронғо йырҙарға, орнаменттарға һалынған. Донъяға яралғандан башлап XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем, йәғни йәйләүҙән ауылға ҡыуып индерелгәнгә тиклем бер нисә мең йыл һуҙымында башҡорт кешеһе ат өҫтөндә булған. Шуға күрә күп кенә боронғо халыҡтар кеүек башҡорттоң да йөрәк тибеше ат тояғы тауышына көйләнгән. Бейеүебеҙҙә был тауыш тыпырҙау менән яңғыратыла. Бәхәс юҡ: бейеүсенең тыпырҙауынан ат тояғы тауышын ишетһәк, беҙҙең йөрәгебеҙ ҡупҡалйый башлап, ҡаныбыҙҙағы боронғолоғобоҙ уяныр, беҙ рухи тантана кисерә башлайбыҙ. Минеңсә, башҡорт кешеһе өсөн бейеүебеҙҙең төп әһәмиәте лә ошо ҡупҡалйыуға ҡайтып ҡала. Был һүҙ менән аңлатып булмаҫлыҡ илаһи күренеш. "Байыҡ" телевизион фестивален йыл һуҙымында телеэкрандан ҡарап барғанда беҙ был тауышты ишеттек. Тик бына Гала концертта иҙәнгә линолеум түшәлеү арҡаһында тамашасы был тауышты ишетмәне. Шуға күрә лә тыпырҙау талап ителмәгән Кавказ халыҡтары бейеүҙәре тамашасыға нығыраҡ тәьҫир итте. Икенсенән, башҡа халыҡтарҙың бейеү элементтары беҙҙең бейеүҙәрҙә өҫтөнлөк ала башлаһа, беҙҙең төп үҙенсәлек онотолоп ҡалмаҫмы?**

**Р. ҒӘБИТОВ:** Дөрөҫ әйтәһең, хәҙерге электрон яҡтан ныҡ йыһазландырылған залдарҙа тыпырҙау бөтөнләй ишетелмәй тиерлек. Бейеүселәр табандарын яндырғансы тыпырҙатыуға тыпырҙата ул, әммә аяҡ тауыштары залға барып етмәй.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Ауыл сәхнәләрендә тыпырҙатыуҙар дыңҡылдап ишетелеп тора, ишетелгәс, халыҡ бейеүҙе лә яҡшы ҡабул итә. Бәлки, беҙгә лә ирланд бейеүҙәрендәге һымаҡ аяҡ тауышын махсус рәүештә яңғыратыу хаҡында уйланырға кәрәктер?

**Ғөмүмән, башҡорт бейеүендә ирландтарҙың бейеүендәге һымаҡ уҡ тыпырҙау ишетелмәһә, бейеү ҙә юҡ тигән һүҙ бит...**

**Р. ҒӘБИТОВ:** Эйе, тап шулай. Ирландтарҙың бейеүендә "Бейеү батшаһы" тигән шоу программаһында ике йөҙләп кеше бер юлы тыпырҙата. Уларҙың аяҡ тауышын алып ташлаһаҡ, бейеүҙәренең мәғәнәһе ҡалыр инеме икән?

**С. АСҠАРОВА:** Мин, асылда, лирик пландағы бейеүҙәрҙе башҡарам бит инде. Бер мәл атайым минең сығышты ҡараны ла: "Кит әле, тыпырҙатып бейемәгәс, ул ниндәй бейеү була инде?" - тип минең сығышҡа үҙ баһаһын бирҙе. Ысынлап та, башҡорт бейеүен ҡарағанда күңелебеҙ менән бая һеҙ әйткән ат тояғы тауышын ишеткебеҙ килә. Һуңғы ваҡытта сәхнәләргә линолеум йәйҙертәләр шул. Тимәк, беҙгә тамашасыға тыпырҙауҙы ишеттереү сараһын күрергә кәрәк.

**Р. ҒӘБИТОВ:** Мин һалған "Еҙ үксә" бейеүе тик дробҡа ғына ҡоролған. Бер яҡтан, көй баҫа башлаһа, икенсе яҡтан, сәхнәнең һәм тамаша залының ҙурлығы һәм иҙәнгә түшәлгән материал тыпырҙауҙы ишеттермәһә, бейеүҙең тамашасыға тәьҫире кәмерәк була. Таҡта түшәлгән сәхнәләрҙә иһә, тамашасы был бейеүҙе дәррәү алҡышлап ҡабул итә.

Бейеүҙә төрлө трюктар ҡулланыу ҙа уның эмоциональ тәьҫир көсөн арттырыу маҡсатынан сығып эшләнә. Был трюктар украиндарҙың "Гопак" бейеүенән алынған. Моиссев был алымды урыҫ бейеүҙәренә лә индереп ебәрҙе. Элек бер бейеүсенең "коза" тигән алымды эшләй белеүенә ғәжәпләнеп ҡарай торғайныҡ, хәҙер был алымды һәр бер бейеүсе башҡара ала. Бейеүҙәрҙең һөҙөмтәлелеген күтәреү өсөн бындай трюктарҙың зыяны юҡтыр, тип уйлайым, шул уҡ ваҡытта акробатикаға ла күсеп китергә ярамайҙыр. Ни өсөн тигәндә, нисек кенә тырышһаҡ та, цирктағы трюктарҙан барыбер уҙҙыра алмайбыҙ бит инде. Шуғамылыр, һуңғы ваҡытта трюктарҙан кирегә - бейеүҙең төп элементтарына ҡайтыу процесы бара.

Әлбиттә, бейеү сәнғәтебеҙ хаҡында төрлө фекерҙәрҙең булыуы, бәхәстәр барыуы бик яҡшы. Был хаҡта һөйләйҙәр икән, тимәк, башҡорт бейеүе яҙмышына битараф булмағандар күп. Беҙҙең шундай байлығыбыҙ бар һәм шул турала беҙ ошолай итеп бәхәс ҡора алабыҙ икән, бының менән ғорурланырға тейешбеҙ. Әгәр ҙә бейеү һалғанда балетмейстерҙар яңылыша икән, бынан да ҡурҡырға ярамай, сөнки, беренсенән, нимәнелер эшләп ҡарамаған кеше генә яңылышмай, икенсенән, әгәр ҙә ҡуйылған бейеү ысын сәнғәт емеше булмаһа, халыҡ уны барыбер ҡабул итмәйәсәк. Бөгөн бейеү һалырға һәм ҡуйырға кешеләр етешмәй, шул ваҡытта беҙ уларҙың һәр бер эшен тәнҡитләп, баштарына һуғып торһаҡ, улар башҡаса бейеү ҡуймаясаҡ та.

Башҡорт дәүләт университетында уҡыған саҡта шағир Рәмил Йәнбәк менән бер бүлмәлә йәшәнек һәм "Шоңҡар" әҙәби-ижад түңәрәге әҙәби кисәләрен бергәләп ойошторҙоҡ. Шул ваҡытта аралашырға тура килгән өлкән ағайҙар беҙгә: "Һеҙ, егеттәр, яҙығыҙ, нимә булһа ла яҙығыҙ. Яҙһағыҙ, барыбер бер нәмә килеп сыға ул", - тип әйтәләр ине. Мин хәҙер шул яҙыусылар һымаҡ үҙемдең йәш коллегаларыма: "Һеҙ, егеттәр, бейеү ҡуйығыҙ, нимә булһа ла ҡуйығыҙ. Ҡуйһағыҙ, барыбер бер нәмә килеп сыға ул", - тип әйтәм. Күп кенә егеттәр: "Былай эшләһәң, ғәскәровса килеп сыға, былай баҫһаң, ғәбитовса килеп сыға, былай атлаһаң Хашим ағай иҫкә төшә", - тип күңелдәрендә булған идеяларын тормошҡа ашырмайынса йөрөтә. Мин уларға: "Һин Ғәскәровтан да, минән дә, Хашим ағайҙан да ал, ҡурҡма, шулай эҙләнә торғас, үҙеңдең стилең килеп сыға", - тип әйтәм. Ҡош балаһы бит һайрарға әсәһенән, башҡа ҡоштарҙан өйрәнә. Сыйырсыҡ балаһының һайрарға өйрәнгән саҡта ҡолон кешнәүе, сепарат, эт өргән тауыштар сығарыуы ла юҡтан ғына түгел. Эйе, сыйырсыҡ балаһы башта шундай тауыштар сығара, аҙаҡ барыбер үҙ тауышы менән һайрай башлай. Кеше лә тап шулай, үҙенән-үҙе бер нәмәгә лә өйрәнә алмай, тота килеп буш ерҙән бейеү һалыу ҙа мөмкин булмаған эш.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✔ ***Беҙҙең төп ансамбль бер сезонға кәмендә бер яңы башҡорт бейеүе ҡуйырға тейеш. Башҡорт бейеүе ошо ансамблдә ҡуйылмаһа, үҫеш алмаһа, тағы ҡайҙа ҡуйылырға тейеш һуң?***



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Беҙ ниндәй халыҡтың ғына бейеүен башҡарһаҡ та, барыбер башҡорт булып ҡалабыҙ. Элек Мәскәүҙә Патрис Лумумба исемендәге институт бар ине. Шунда уҡыусы африкандар ҙа урыҫ халыҡ бейеүҙәрен башҡара торғайны. Улар урыҫ хәрәкәтен нисек кенә тырышып эшләһә лә, африканса килеп сыға. Шуның һымаҡ, беҙҙең бейеүҙәргә башҡа халыҡтарҙан алынған хәрәкәттәр барыбер башҡортса килә лә сыға. Шуға күрә мин башҡорт бейеүе элементтары юғалып ҡалыуынан ҡурҡмайым.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Беҙ бейеү ансамбле менән йылына бер тапҡыр Мәскәүҙәге Чайковский залында концерт ҡуябыҙ. Унда тамашасылар йыл һайын бер үк нәмәне тылҡый: "Һеҙҙең репертуарҙа башҡорт бейеүҙәре бик аҙ, беҙ күберәк башҡорт бейеүҙәрен ҡарарға теләйбеҙ. Урыҫ, испан бейеүҙәрен башҡаларҙың башҡарыуында ҡараныҡ инде, улар үҙҙәренең бейеүен һеҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ бейей", - тиҙәр. Беҙ башҡорт бейеүен яҡшы бейегәс, күберәк үҙебеҙҙең бейеүҙәрҙе бейергә тейешбеҙ. Беҙ хатта сәсрәп китһәк тә, урыҫ, испан бейеүҙәрен уларҙан яҡшыраҡ бейей алмаясаҡбыҙ.

**Х. МОСТАЕВ:** Ысынлап та, беҙ нишләп башҡаларға оҡшарға тырышырға тейешбеҙ әле? Әгәр ҙә беҙҙең ансамбль ниндәйҙер халыҡтың бейеүен башҡарһа, ниңә шул халыҡ йәшәгән республиканың дәүләт ансамбле беҙҙең бейеүҙәрҙе бейемәй? Минеңсә, бында мәсьәлә ошо рәүешле ҡуйылырға тейеш. Әйтәйек, беҙ Ҡырғыҙстанға йә Татарстанға гастролгә барһаҡ, уларҙың бейеүҙәрен алып барабыҙ, ә ниңә улар яғынан "Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы" принцибы үтәлмәй ҡала? Мине бына ошо мәсьәлә лә борсой. Етмәһә, ҡайһы бер бынамын тигән бейеүҙәр, мәҫәлән, Риф Ғәбитовтың бейеүҙәре, ансамбль репертуарынан төшөп ҡала бара.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Балетмейстерҙар юҡ, шуға яңы бейеүҙәр ҡуйылмай, тип тик ултыралар шул беҙҙә. Был, минеңсә, башҡорт бейеүен ҡуймаҫ өсөн һылтау ғына. Ә бит башҡа халыҡтарҙың бейеүҙәрен ҡуйырға белгес табыла. Шул арҡала ансамблдең репертуары сит халыҡтар бейеүҙәре менән тулды. Балетмейстерҙар бар улар, башҡорт фольклорын белгән профессионалдар ҙа бар. Тик уларҙы ни өсөндөр яҡын килтермәйҙәр. Уларҙы йәлеп итергә, төрлө конкурстар иғлан итергә кәрәк. Мин бында башҡа юл күрмәйем.

**С. АСҠАРОВА:** Беҙҙең төп ансамбль бер сезонға кәмендә бер яңы башҡорт бейеүе ҡуйырға тейеш. Башҡорт бейеүе ошо ансамблдә ҡуйылмаһа, үҫеш алмаһа, тағы ҡайҙа ҡуйылырға тейеш һуң?

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Мин был фекергә "Башҡорт фольклорына нигеҙләнгән мәғәнәле бейеү" тип өҫтәр инем. Хәрәкәттәр берлегенән торған мәғәнәһеҙ бейеүҙе мин дә ҡуя алам. Бында беҙгә өлгө бар: Фәйзи Ғәскәровтың бейеүҙәре. Башҡортса бейер өсөн, минеңсә, яланаяҡ ауылда йүгереп үҫергә, башҡорттоң тарихын, фольклорын белергә кәрәк. Ансамблдә был йүнәлеште алып барыусы бер генә етәксе лә юҡ.

**Р. ҒӘБИТОВ:** Онищенко етәкләгән бейеүселәр марийса ла, урыҫса ла, башҡортса ла бер төрлө бейей ине. Ул ошо хәлде белеп ҡалып, миңә бер мәл: "Риф, миңә бейей белеүсе бер-ике башҡорт табып бир әле. Бына миндә бер Миңлегәле генә бар, ул яҡшы бейей, башҡаларҙыҡы башҡортса килеп сыҡмай", - ти.

**С. АСҠАРОВА:** Минеңсә, һәр бер профессиональ коллективта актерлыҡ оҫталығы мәктәбе булырға тейеш. Әйтәйек, халыҡ артисҡаһы Гөлли Мөбәрәкова "Туған тел" шиғырын уҡыған саҡта бейеүсе ошо шиғырға һалынған мәғәнәне бейеп күрһәтә. Ғөмүмән, һеҙҙең ансамблдә аттестация бармы һуң?

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Исем өсөн генә бар. Беҙҙең йәш бейеүселәр хатта Ғиниәт Ушановтың, Йәнгәле Вахитовтың, Йәүҙәт Бикбирҙиндың кем икәнен дә белмәй.

**С. АСҠАРОВА:** Аттестацияла артиска башҡорт тарихы, фольклоры, донъя классикаһы буйынса һорауҙар ҙа бирелергә тейеш.

**Х. МОСТАЕВ:** Башҡорт бейеүенең килеп сығышы, ансамбль тарихы хаҡында һөйләүсе кабинет-музей итеп күрәм мин был эште. Бында системалы ҡараш кәрәк.

**С. АСҠАРОВА:** Был - Мәҙәниәт министрлығының бер бүлегенең эше булырға тейеш тип уйлайым. Башҡорт хореографияһы хатта айырым институт өйрәнерлек өлкә.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Мин ансамблгә килгәндә Риф ағайҙар һәм башҡа өлкән ағайҙар менән берлектә көн һайын 15-20 минут башҡорт бейеүе хәрәкәттәрен ҡабатлай инек. Уның араһында иң күп ҡабатланғаны башҡорт тыпырҙағы булды. Хәҙер ундай традиция юҡҡа сыҡты, күберәк башҡа халыҡтарҙың бейеү хәрәкәттәре буйынса күнекмә яһайбыҙ. Шуға күрә лә ансамбль бейеүҙәрендә башҡорт характеры юғала бара. Мин үҙемде тәжрибәле бейеүсе һанайым, башҡорт характеры минең ҡанымда. Әммә ләкин аҙналар буйына башҡортса бейемәһәм, мин дә бутала башлайым.

**Р. ҒӘБИТОВ:** Мин һәр ваҡыт бейеүҙәрҙе халыҡ бейеү көйҙәренә ҡуйырға тырыштым. Әгәр ҙә композиторҙар яҙған көйҙәргә бейеү ҡуйһаң, үҙең дә һиҙмәҫтән, ситкә тартылаһың да китәһең. Халыҡ көйө барыбер һине бер ҡалыпта тота. Башҡорт көйөнә урыҫса йә башҡаса бейеп булмай. Башҡорт бейеүенең тағы бер үҙенсәлеге - уның ниндәйҙер сюжетҡа ҡоролоуы һәм мәғәнәле булыуы. Минеңсә, быны Фәйзи Ғәскәров уйлап сығармаған, ул бары башҡорт бейеүенең электән килгән ошо үҙенсәлеген күрә һәм тотоп ала белгән.

▶ **Академик ансамблдә башҡорт бейеүҙәренең аҙайыуы мәғарифтағы төбәк компонентын ҡыҫҡартыуға ла оҡшап китә. Әммә кемдер берәү ансамблгә килеп, башҡортса бейеүҙәрҙе ҡыҫҡартығыҙ, тип әмер биргәндер тип уйламайым. Былар барыһы ла үҙебеҙҙең кешеләр тарафынан башҡарыла. Сөнки беҙ үҙебеҙҙең шундайын оло сәнғәтебеҙҙең ҡәҙерен белмәйбеҙ. Бер мәл республикабыҙға ҡунаҡ булып килеүсе ҡаҙаҡ кешеһе "Ете ҡыҙ" бейеүен ҡарағас, минән бейеүҙә сағылған тарихты һөйләүемде үтенде. Һөйләп биргәс: "Ниндәйен ҡыҙғаныс тарих, ниндәйен оло сәнғәт, ниндәйен бөйөк халыҡ!", - тип үҙенең һоҡланыуын белдерҙе. Тарихыбыҙ бар, фольклорыбыҙ бай, ә ниңә "Ете ҡыҙ" тибындағы бейеүҙәр тыумай һуң?**

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Мин, тыумай, тип әйтмәҫ инем. Йәүҙәт Бикбирҙин, Риф Ғәбитов, Хәлил Ишбирҙин, Динислам Искужин ниндәй бейеүҙәр ҡуйҙы. Әммә ниңәлер ул бейеүҙәр беҙҙең ансамблгә алынмай һәм, ғөмүмән, ундай бейеүҙәр беҙҙең ансамблдә тыумаid.

**Х. МОСТАЕВ:** Ете ҡыҙ көй ағымында сәхнәгә сығып, бейемәйенсә, шул килеш кенә баҫып торһа ла, шундай уҡ һөҙөмтәне тыуҙыра алыр ине. Сөнки ул бейеүҙең артында иҫ киткес тарих, оло һиҙланыу ята.

**Ф. ҠАҘАҠБАЕВ:** Хәшим ағайҙың тәрән йөкмәткеле "Азамат" бейеүе лә репертуарҙан алып ташланды.

**Р. ҒӘБИТОВ:** Ансамблгә аҡса башҡорт бейеүен үҫтереү өсөн бүленә. Үҙегеҙ беләһегеҙ, бер пар кейем өсөн генә күпме аҡса тотонола. Ә беҙ шул аҡсаларҙы ҡаҙаҡ, уйғыр, ҡырғыҙ, төрөк сәнғәтен үҫтереү өсөн йүнәлтәбеҙ. Уларҙың бейеү ансамблдәрендә башҡорт кейемдәре бармы икән? Һөҙөмтәлә нимә килеп сыға: беҙҙекеләр йүнләп башҡортса бейей алмай, шул уҡ ваҡытта башҡа халыҡтарҙыҡын да килештерә алмай. Бөйөк Мәхмүт Эсамбаев башҡортса бейеп ҡараны бит, барыбер башҡортса килеп сыҡманы. Мәскәүҙәр "Ете ҡыҙ"ҙы бейегәйне, әллә ниндәй аңлайышһыҙ бейеү килеп сыҡты.

**Х. МОСТАЕВ:** Минең уҡытыусыларым Ғиниәт Ушанов һәм Фәйзи Ғәскәров булды. Концерттар ваҡытында Ғиниәт Ушанов яңғыҙ бейеүҙәр башҡара торғайны. Тик ул бер үк бейеүҙе төрлө концертта төрләсә бейене. Үҙе ҡурайҙа уйнап ебәрә лә, бер аҙ торғас, бейеп китә. Ул, нисектер, ҡурай менән бейеүҙе органик рәүештә берләштерә алды. Мин бының серен аҙаҡтан ғына белдем. Бақтиһәң, Ғиниәт ағай импровизация менән бейегән икән. Хәҙер инде шулай иҫәпләйем: тик импровизация менән бейегән бейеүсе генә ысын бейеүсе тип аталырға хаҡлы. Ә ҡалғандар бейеүҙе түгел, ә автоматик рәүештә кемгәлер оҡшарға тырышыусылар ғына. Бәҙәр апай Йосопова ла Ғиниәт ағай кеүек бейеү маһирҙары рәтендә. Ул профессиональ башҡорт театр һәм бейеү сәнғәте өсөн ҙур көс һалған шәхес.

**С. АСҠАРОВА:** Балыҡ башынан серей, йәмәғәт. Ни өсөн беҙҙең хореографик училищела "Башҡорт бейеүе" предметы уҡытылмай?

**Р. ҒӘБИТОВ:** Татарстанда мәсьәлә нисек тора? Дуҫым Айрат Хәмитов әйтеүенсә, уларҙың президенты ансамбль етәкселегенә йылына тулы бер татарса программа әҙерләү мәсьәләһен ҡуя һәм быны өсөн аҡса йәлләмәй. Улар тотош программаһын татар бейеүенә бағышлай.

**С. АСҠАРОВА:** Беҙҙең ансамбль быға тиклем бер нисә легендаға бер нисә актлыҡ хореографик спектаклдәр ҡуйырға тейеш ине. "Мираҫ"ансамбле "Урал батыр" буйынса спектакль ҡуйырға итә, тик, ниңәлер, балетмейстерҙы Мәскәүҙән саҡырғандар, шуны аңлай алмайым.

**Р. ҒӘБИТОВ:** Беҙ бит шул маҡсат менән "Бейеүсе бүреләр" тигән спектакль ҡуйыр өсөн Стәрлетамаҡҡа киттек, әммә финанс ярҙамы ала алманыҡ һәм идеябыҙ һауала аҫылынып ҡалды. Ә "Мираҫ" ансамбленә килгәндә, унда үҫеш, хәрәкәт барлыҡҡа килде. Ундағы егеттәрҙең күҙҙәре янып тора. Тик ситтән килгән балетмейстерҙар ошо утты файҙалана алырмы икән?

**Х. МОСТАЕВ:** Хәҙер беҙҙә "Байыҡ", "Зарифа","Заһиҙә" кеүек яңғыҙ бейеүҙәр бөтөнләй ҡуйылмай. Элек тамашасы күмәк бейеүселәр араһынан атаҡлы яңғыҙ бейеү оҫталарын танып, күмәк бейеүҙе алҡышлай, баһалай торғайны. Хәҙер ҡайһы саҡ тамашасы ике сәғәт буйы тотош массаны ҡарап ултырып, бейеүҙән тәңәләп арып бөтә. Тамашасының кәйефе, артистың ял итеүе ихтыяжы хаҡында бөтөнләй уйланылмай.

▶ **Һәр бер сәнғәт өлкәһенең үҙ проблемалары бар. Шуға күрә гел зарланып йәшәгәнсе, башҡорт бейеү сәнғәтен үҫтереү, һаҡлау өсөн дә ниндәйҙер аныҡ саралар күрергә ваҡыттыр...**

**С. АСҠАРОВА:** Ағайҙар, минең һеҙгә бер тәҡдимем бар. Минеңсә, беҙҙең республикала бейеүселәр һәм бейеү ҡуйыусылар берләшеп, хореографтар союзы ойошторорға кәрәктәр. Беҙҙә бит яҙыусылар, рәссамдар, композиторҙар, архитекторҙар, театр эшмәкәрҙәре, ҡурайсылар союздары бар. Улар ҙа бит юктан ғына үҙҙәренең союзын төҙөмәгән, үҙҙәренең ижади үҫеш проблемаларын хәл итеү маҡсатында союзға берләшкән.

Ә бит беҙҙең проблемалар күп. Уларҙы профессиональ яҡтан тикшереп, тормошҡа ашыуын күҙәтеүсе орган кәрәклеге бәхәсһеҙ. Ярай әле, бына был юлы беҙҙе "Киске Өфө" саҡырып алды. Ә бит һөйләшеүҙәге был мәсьәләләр күптән беҙгә билдәле һәм улар күптән хәл итеүҙе көтә. Быларҙан тыш, балетмейстерҙарҙың ансамблдәргә бейеү ҡуйырға саҡырылмауы, бейеү көйҙәрен аранжировкалағанда башҡа халыҡ көйҙәре мелизмдары яңғырауы, башҡорт бейеү костюмының ярлылығы кеүек башҡа бик күп мәсьәләләр шундай ижтимағи ойошмала ҡаралып, хәл итеүгә йүнәлеш алырға тейештәр. Югиһә, бейеүселәребеҙ үҙҙәренең бихисап ижади һәм шәхси проблемалары менән һәр ҡайһыны үҙ-үҙенә генә бикләнгән кеүек. Хатта Мәҙәниәт министрлығында ла хореография буйынса белгес юҡ.

**Р. ҒӘБИТОВ:** Бер заман беҙ, бер нисә бейеүсе, уставын эшләп, бейеүселәр ассоциацияһы төҙөргә маташып ҡарағайныҡ. Тик беҙҙең идеяны юғарыла хуплаусылар булмағас, был эшебеҙ нисек башланһа, шулай уҡ һүнеп ҡалды. Дөрөҫ әйтәһең, Сулпан, бейеүселәр бер ниндәй ҡанат аҫтында ла түгел хәҙер. Беҙҙең Стәрлетамаҡ бейеү ансамбле бейеүселәренең эш хаҡы 5-6, уҙа барһа, 10 мең. База юҡ, яңы костюм тектерергә лә етмәй бүленгән аҡса.

▶ **Владимир Ленин декабристар хаҡында "...был революционерҙарҙың мөхите тар**

***Ысынлап та, беҙ нишләп башҡаларға оҡшарға тырышырға тейешбеҙ әле? Әгәр ҙә беҙҙең ансамбль ниндәйҙер халыҡтың бейеүен башҡарһа, ниңә шул халыҡ йәшәгән республиканың дәүләт ансамбле беҙҙең бейеүҙәрҙе бейемәй? Минеңсә, бында мәсьәлә ошо рәүешле ҡуйылырға тейеш. Әйтәйек, беҙ Ҡырғыҙстанға йә Татарстанға гастролгә барһаҡ, уларҙың бейеүҙәрен алып барабыҙ, ә ниңә улар яғынан "Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы" принцибы үтәлмәй ҡала? Мине бына ошо мәсьәлә лә борсой. Етмәһә, ҡайһы бер бынамын тигән бейеүҙәр, мәҫәлән, Риф Ғәбитовтың бейеүҙәре, ансамбль репертуарынан төшөп ҡала бара.***

**✓ *Бөтәһе лә хәҡиҡәткә күтәрелә алмаһа ла, һәр кемебеҙҙең тәриҡәткә өлгәшеп, аңды үҙгәртеү мөмкинлеге бар. Сөнки ата-бабаларыбыҙ тап суфыйсылыҡ юлында булған. Суфыйсылыҡ беҙҙең ҡанда ул.***

**булған, улар халыҡтан бик алыҫ торған", тип яҙған. "Байыҡ" фестиваленең һуңғы Гала концертынан сыҡҡас, мин: "Эйе, профессиональ бейеүселәр халыҡтан бик ныҡ алыҫлашҡан", - тигән һығымта яһағайным. Был фекерҙе бөгөн һеҙ ҙә йөпләнегеҙ, буғай...**

**С. АСҠАРОВА:** Мин "Байыҡ" фестиваленә башҡа халыҡтар бейеүселәренең килеүенә ҡаршы түгелмен, тик уларҙың ни өсөн үҙҙәренең бейеүе менән генә килеүен ҡабул итә алмайым. Һуң, уларға алдан уҡ белгестәр ебәреп, өйрәтеп, бында башҡорт бейеүе менән килеүен ойоштороп була бит. Әгәр ҙә Мәҙәниәт министрлығы профессиональ бейеү ансамблдәрен аттестация менән "дөмбәҫләп" торһа, Әхмәр ағай, Гала концертта улар оятҡа ҡалмаҫ ине. Профессионалдар башҡарыуындағы бейеүҙә башҡорт характеры булмаһа, уларҙың бейеүе ике тин бер аҡса.

**Х. МОСТАЕВ:** Фәйзи ағай Ғәскәров миңә ансамблдә үҙенең стилен, бейеүҙәрен һаҡлап ҡалыуымды үтенде. Ансамбль етәкселегенә дәғүәмде белдергәйнем, хәҡиҡәт оҡшаманы. Риф Ғәбитов ансамблдә етәксе булған саҡта Фәйзи ағай хаҡында балет ҡуйғайным, хәҙер унда ҡуйылған өс бейеүемде лә репертуарға индерә алмайым.

"Халыҡ ижад итә, беҙ шуны аранжировкалайбыҙ ғына", тигән Глинка. Халыҡ, тигәндә, беҙ тотош халыҡты түгел, уның айырым шәхестәрен күҙ алдына килтерәбеҙ. Минеңсә, халыҡ этәргес көс, сюжет материалы ғына бирә.

**С. АСҠАРОВА:** Йәүҙәт ағай Бикбирҙин Баймаҡ районының Әмин ауылына барып "Һәтәү әминский" тигән бейеүен ижад итә. Беҙгә ул шул ауылға барып, бейеүенең геройын нисек итеп ситтән күҙәтеүен рәхәтләнеп көләп һөйләгәйне. Ә бит ниндәй колоритлы "Һәтәү әминский", "Сонайым" кеүек бейеүҙәр бер ниндәй профессиональ бейеү ансамбле репертуарында ла юҡ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бейеү сәнғәтендәге хәл итеүҙе көткән мәсьәләләрҙең күплегенә һеҙҙең дә башығыҙ әйләнеп киткәндер, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Былар барыһы ла нимә хаҡында һөйләй һуң? Эйе, быларҙың күбеһе дәүләт кимәлендә яҡлау табырға һәм хәл ителергә тейешле мәсьәләләр. Шулай ҙа Сулпан Асҡарова ла дөрөҫ әйтә: Башҡортостан Бейеүселәр союзы барлыҡҡа килеп, халҡыбыҙ хазиналарының иң мөһимдәренең береһе булған бейеүебеҙ ҙә был өлкә маһирҙарының ижтимағи ойошмаһы кимәленә күтәрелһә, бейеү сәнғәтебеҙ бер түгел, ике ҡанат аҫтына алыныр ине. Әңгәмәлә дәүләт, ижтимағи ойошма кимәлендә башҡарылырға тейешле эштәргә ҡараш ҡына һирпелде, тип уйлайыҡ. Милли рухыбыҙҙы, гәмебеҙҙе ҡуҙғатыр, йөрәгебеҙҙе ҡупҡалйытыр, ғәмһеҙлек, битарафлыҡ йоҡоһонан уятыр өсөн кәрәк беҙгә бейеүебеҙ! Тимәк, был тураһағы һөйләшеү ҙә кәрәктер, шулай бит? Һәр хәлдә, уҡыусыларыбыҙҙан фекерҙәр көтәбеҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# АҢЫҢДЫ ҮҘГӘРТҺӘҢ,

## тормошоң да үҙгәрер

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Урал ВИЛДАНОВ, философия фәндәре докторы, профессор:** Философия фәненең иң ҡатмарлы, тәрән йүнәлештәренең береһе - кеше, шәхес проблемаһы, уның эске донъяһы, аныҡлабыраҡ әйткәндә, кешенең аңы тикшеренеүҙәрем үҙәгендә тора. Был мәсьәлә менән оҙаҡ йылдар шөғөлләнгәндән һуң шундай һығымтаға килдем: тышҡы мөхит кешегә бик аҙ йоғонто яһай. Нигеҙҙә барыһы ла эске донъянан тора. Проблемалар ҙа шунан килә. Кеше үҙ яҙмышына үҙе хужа. Иң мөһиме, үҙ аңыңды үҙгәртеү өҫтөндә эшләргә кәрәк. Кеше һәр эшен, ҡылығын аңлы рәүештә башҡарырға, үҙен һәр саҡ ситтән күҙәтергә өйрәнергә тейеш. Үҙеңә ситтән ҡарай белһәң, ярһыулыҡ, нәфрәт тойғолары шунда уҡ юҡҡа сыға. Йыйылған хис-тойғоларҙы, эмоцияны ыңғай яҡҡа ебәрә алаһың. Мәҫәлән, энергияңды сирле ағзаңа йүнәлтергә була. Аңлы рәүештә йәшәүгә ынтылһаң, шунда уҡ кешеләр менән мөнәсәбәттең яҡшырыуын тояҫаҡһың. Ғаиләңдә лә гармония барлыҡҡа киләсәк.

Аңды үҙгәртеү алымдары бер нисә мең йыл элек билдәле булған. Әйтәйек, буддизмда ул - медитация алымы. Исламда - тәриҡәт, зекер әйтеү, "лә илләһә иллаллаһ" тип ҡабатлау. Мосолман илдәре шәриғәт ҡануны менән йәшәй. Әммә шәриғәт - белемдең тәүге баҫҡысы ғына, дин тураһында өҫтән, һай ғына йөрөтөлгән фекер, икенсе төрлө әйткәндә, һуҡырҙарса табыныу, һуҡыр иман. Бына шуға көнсығыш илдәрҙә һуғыштар тынмай. Икенсе баҫҡысҡа, тәриҡәткә баҫҡан кеше, йәғни суфыйсылыҡ юлында булыусы бер ҡасан да ҡулына ҡорал алмай. Тәриҡәтте үҙләштерәһең икән, аңың үҙгәрә башлай, яҡтыра. Өсөнсө баҫҡыс - мәғрифәт. Бында инде аң киңәйеү һөҙөмтәһендә юғары кимәлдәге белем үҙләштерелә. Ниһайәт, дүртенсе баҫҡыс - хәҡиҡәт, йәғни хаҡ белемгә эйә булыу. Бөтә баҫҡыстарҙы үткән суфый Хоҙай менән бер бөтөн булыуға өлгәшә. Бөгөн дин аяҡҡа баҫа, тибеҙ. Әммә асылда шәриғәт ҡанундарына бикләнеү генә бара. Төрлө дини йолалар ғына атҡарыу әле Аллаға яҡынайыуҙы аңлатмай. Аллаһы Тәғәләгә һуҡырҙарса табынырға түгел, ә Алланы күңеленә индерергә кәрәк.

Бөтәһе лә хәҡиҡәткә күтәрелә алмаһа ла, һәр кемебеҙҙең тәриҡәткә өлгәшеп, аңды үҙгәртеү мөмкинлеге бар. Сөнки ата-бабаларыбыҙ тап суфыйсылыҡ юлында булған. Зәйнулла ишан феномены юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Суфыйсылыҡ беҙҙең ҡанда ул. Зәйнулла Рәсүлевтан өлгө алып, көнөнә бер нисә мең тапҡыр зекер әйтергә мөмкин. Шулай мөһим булмаған проблемаларҙан алыҫлашырға, эмоцияларҙы баҫырға, насар ғәҙәттәрҙән арынырға була. Иң мөһиме, тәүфиҡ - тәүге фиғелебеҙ - ояна. Беҙ үҙ асылыбыҙға ҡайтабыҙ.

Аңлы йәшәү өсөн төрлө китаптар уҡыу мөһим түгел, ни бары шулай йәшәй башларға ғына кәрәк. Иртәнсәк тороу менән йоҡоға талғансы үҙегеҙҙе иғтибар үҙәгендә тотоп ҡарағыҙ. Быны бер ғәҙәткә әйләндерегеҙ. Шул саҡта тормоштоң яҡшыға үҙгәреүен тойорһоғоҙ.

**Рубриканы**
**Мөнир ИҠСАНОВ**
**алып бара.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




### Белмәй ҡалма

Бер ҡарт әбейе менән ҡунаҡ йыйған. Килгән ҡунаҡтар өҫтәл артына урынлашып, һыйлана башлаған. Хужабикә үҙ эше менән булышып, ҡаҙан тирәһендә әйләнгеләп тик йөрөй, ти. Ҡунаҡтарҙы бер үҙе һыйлап аптыранған хужа: "Әбей, беҙ ҡунаҡ саҡырҙыҡ, белмәй ҡалма!" - тип әбейенә ҡысҡыра, ти.

Ҡунаҡ йыйһаң, ашың да, ҡашың да булһын, тигәнде онотоп ташлайбыҙ шул ҡайсаҡ.

### Ҡунаҡ баҫҡан

Ауылда бер инәй ҡунаҡ йыйырға булған. Бер йыйғанда йыяйым, тигәндер инде, саҡырған был байтаҡ кешене. Ҡунаҡтар килә башлаған, урын етмәй икән. Илле алла, ҡырҡ мулла менән тигәндәй, саҡ-саҡ һыйҙырып бөтһә, тағы берәүҙең инеп килгәнен тәҙрәнән күргән дә:

- Эй, Аллам, әллә быныһы ла миңә ҡунаҡҡа килә ята микән? - тип ҡысҡырып ебәргән.

Шулай, һәр ҡайһыһына ла ай, ҡояш булғы килә, ҡаҙан аҫып һыйлағы килә. Тик ҡайсаҡ юрғаныңа ҡарап аяҡты һуҙырға кәрәклекте, иҫәп- хисапты, саманы онотоп ебәрәбеҙ шул.

### Сараһыҙҙың көнөнән

Беҙҙең яҡ кешеләре борон шәл һатырға, ҡорот, май, балан һ.б. ризыҡтарын төрлө кәрәк-яраҡҡа алмаштырырға Троицк баҙарына йөрөнө. Ылау булһа, шуға эләгеп, булмаһа инде, йәйәүләп, 10-15 саҡрым үтергә тура килә ине уларға. Бер инәй баҙарҙан йәйәүләп ҡайтырға сыҡҡан, бәхетенә, күрше ауылдан Михаил знакумы ла йәйәүләп ҡайтып бара икән. Юлда яңғыҙы булмаясағына ҡыуанып, әбей тегенең артынан эйәргән. Тик тегеһе бик шәп итеп атлай икән. Уның ыңғайына атлап арманһыҙ булған инәй, аҙ ғына ял итеп алайыҡ, тип аңлатырға теләп:

-Мало-мало ляжем, Михайла! - тигән.

Йүнһеҙ юлдаш булмаҫ, ят моңдаш булмаҫ, тигәндәй, ситтәрҙең теле менән ни һөйләгәнендә үҙең дә аңламауың бик ихтимал шул.

### Ҡаты бишенсе

5-се класс уҡыусыларының ата- әсәләр йыйылышы бара. Кемдең балаһы яҡшы иҫәптә - улар кәйефле геүләшеп ултыра, кемдең балаһы уҡыуы менән ҡыуандырмай- улары шым ғына баш баҫып ултыра икән. Балаһының өлгәшмәүенә эсе бошоп ултырған бер апай ауыр көрһөнгән дә: "Ҡаты бишенсегә эләкте балам, Хоҙай ярҙамын бирһен!" - тигән булған.

Һәр ата-әсә балаһының яҡшы, хатта башҡаларҙан өҫтөнөрәк тә булыуын теләй. Етешһеҙлектәренә күҙ йоморға тырыша. Ҡайсаҡ шуның менән балаларҙы боҙоп та ташлай. Бәләкәй сағында өфөлдәтәбеҙ ҙә, олоғайғас, уфылдарға ҡала инде...

### Ҡола бейә Алла һәппәр!

Беҙҙең ауылда ҡабалан-ҡабалан һөйләй торған бер ағай була торғайны. Әйтер һүҙен ҡабалан-ҡарһалан әйтә, аңлаған кеше аңлап ҡала, аңламағаны аптырай инде. Бер ваҡыт был ағай күршеһенең аты ҡазалағанын күреп ҡалып, өйҙәренә йүгереп ингән дә: "Күрше, ҡола бейәң Алла һәппәр!" - тигән һәм күршеһе аптырап торған арала сығып та йүгергән.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӘЙЕФ ТОРОШОН...

## һыу ҙа билдәләй

■ Косметик саралар составында булған ҡайһы бер матдәләр организмда тупланып, уға зыян итеүе, хатта яман шеш кеүек ауыр сирҙәргә килтереүе ихтимал. "Росбалт" яҙыуынса, күптән түгел АҠШ-тың тауарҙар һәм медикаменттар сифатын контролдә тотоу буйынса федераль идаралығы ирен буяуының 400 төрөндә ҡурғаш ҡушылмалары тапҡан. Британия ғалимдары ла ауыр металдарҙың косметика әйберҙәрендә осрауын белдерә. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Канадала ла үтә һәм уның һөҙөмтәләре буйынса кеше сәләмәтлегенә зыян килтереүсе ауыр металдарҙы косметика етештереүҙә ҡулланыу тыйыла.

■ Тель-Авив университеты тикшеренеүселәре әйтеүенсә, һимеҙлек кешенең дөйөм торошона ғына түгел, ә психик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһап, йыш ҡына депрессияға алып килә, бындай кешеләр эштә лә тиҙерәк арый. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, физик әүҙемлек өсөн ваҡыт табыусылар бындай проблемаларға осрамай. Мәҫәлән, аҙнаһына 4 тапҡыр спорт менән шөғөлләнеүселәр депрессияның нимә икәнен дә белмәй. Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

■ Коннектикут университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһеҙлек барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшереүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойоғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.

■ Пластик һауыттарға һалып һатылған аҙыҡ-түлек организм өсөн зыянлы, тип белдерә Калифорния ғалимдары. Был һауыттарҙы етештергән ваҡытта ҡулланылған бисфенол А һәм фталаттар эндокрин системаһы эшмәкәрлеген боҙа һәм түлһеҙлеккә килтерә. Бынан тыш, бисфенол А канцероген тәьҫиргә эйә, ә фталаттар һимереүгә килтерә. Таҙа емеш-еләк ашау был матдәләрҙең кимәлен күпкә кәметә ала. Шулай уҡ пластик һауыт-һаба ла зыянлы, быяла һауыт-һаба ҡулланыу күпкә яҡшыраҡ. Белгестәр консерваланған продукттарҙың, "пакет"лы эсемлектәрҙең дә зарарлы булыуын билдәләй.

■ International Dairy Journal журналы белдереүенсә, көнөнә бер стакан һөт эсеү организмды файҙалы элементтар менән тулыландырып ҡалмай, баш мейеһен дә үҫтерә. Мейн университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың араһында һөт яратыусыларҙың хәтере лә, фекерләү ҡеүәһе лә яҡшыраҡ булыуы асыҡланған. Бының өсөн көнөнә бер стакан һөт эсеү ҙә етә, ти ғалимдар. Диетологтар иһә, организмдағы кальций һәм D витамины запасын тулыландырыу өсөн 3 стакан һөт эсергә кәңәш итә.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# ЗӘЙТҮН АҒАСЫ ҺӘМ КЕШЕ:

## ваҡыт менән һыналған дуҫлыҡ

**Зәйтүн ағасының (оливковое дерево) ерҙә йәшәүенә14 мең йыл тирәһе бар, тиҙәр. Башта ул ҡырағай үҫемлек булған, яҡынса 6 мең йыл элек кеше уны үҙе үҫтерә башлаған.**

### Иҫ киткес сифаттары

Зәйтүн ағасының ватаны тип көньяҡ-көнбайыш Азия һанала, уны маҡсатлы рәүештә үҫтереү ҙә ошо ерҙәрҙән башланған, тиҙәр. Вавилонда һәм Боронғо Мысырҙа был ағас күпләп үҫтерелгән. Бер легенданан күренеүенсә, юлсылар Мәккәнән Мароккоға тиклем юлды сүллектә ултыртылған зәйтүн ағасы аллеяһы күләгәһендә генә үтә алған.

Зәйтүн - эҫене лә, хатта15 градус һыуыҡты ла еңел үткәреүсе сыҙамлы ағас. Ул 150 йылға тиклем йәшәй һәм бик мул уңыш бирә ала. Шуға ла уны сыҙамлылыҡ һәм оҙаҡ йәшәү символы тип йөрөтәләр. Йәшен һуғып, янып, ағастан бер бәләкәй генә киҫәк һерәйеп ҡалһа ла, бер-нисә көн үтеүгә ул һабаҡ бирәсәк һәм ҡабат үҫә башлаясаҡ.

Ағас остары ла тығыҙ ҙа, ҡаты ла булыуы өсөн зәйтүн ағасын юғары баһалай. Был тәбиғи, сөнки иң затлы биҙәүестәр, гәҙәттә, ҡаты, ныҡ ағастан яһала. Ә был ағас ҡалғандарҙан үҙенең ҡатылығы менән айырылып тора.

### Күп диндәрҙә телгә алына

Зәйтүн ағасы күп кенә мәҙәниәттәрҙә дини йолалар ваҡытында киң ҡулланыла. Был ағастың майынан эшләнгән майшәмдәрҙең ҡоромо булмай, шуға күрә улар менән Мысыр ғибәҙәтханаларын, сиркәүҙәрҙе, мәсеттәрҙе яҡыртҡандар. Зәйтүн майы тураһында "Ҡөрьән"дә лә телгә алына ("Аннур" сүрәһе, 24/35). "Аль-анам" сүрәһендә, мәҫәлән, зәйтүн Аллаһ фатиха биргән ағастар рәтендә һанап үтелә. "Беҙ бер-береһенә оҡшаш һәм айырмалы яҡтары булған йөҙөм, гранат һәм зәйтүн ағастарын үҫтерҙек. Был ағастарҙың емештәре барлыҡҡа килгән һәм өлгөргән ваҡытҡа иғтибар итегеҙ әле: бында ысынлап та иманлы кешеләргә билдә бар" ("Аль-анам" сүрәһе, 6/99).

### Һаулыҡҡа файҙаһы

Зәйтүн емеше тәндәге тоҙҙарҙы, майҙарҙы эшкәртергә, зыян килтереүсе холестеринды сығарырға, аш һеҙдереү процестарын көйләргә ярҙам итә. Шулай уҡ эске ағзаларҙы тоҙ ултырыуҙан һаҡлай. Ошо һуңғы әйтелгән сифаты арҡаһында ул бала көткән ҡатындар өсөн айырыуса файҙалы, сөнки зәйтүн емеше бала көткән осорҙа бихисап минераль матдәләрен юғалтҡан әсәгә натрий тоҙон тулыландырырға, шул уҡ ваҡытта зарар килтерә торған тоҙҙарҙан арынырға ла ярҙам итә.

Зәйтүн майы емергес көс - ультрафиолет нурҙарҙан да һаҡлай, шулай уҡ тире яман шеше ауырыуын да иҫкәртә. Быға артыҡ гәжәпләнергә түгел: кояш нурҙары бик әүҙем ҡыҙҙырған субтропик климат үҫемлеге үҙе лә был нурҙарҙан һаҡланырға мәжбүр. Шуға ла ультрафиолеттан һаҡлай торған матдәләр унда артығы менән тупланған. Был емештең шифаһы тейһен өсөн уны көнөнә нисәүҙе ашарға һуң? Аныҡ ҡына билдәләнгән норма юҡ. Ә майын эсеү нормаһы билдәлә, был турала киләһе бүлектән белерһегеҙ.

Зәйтүн - иң беренсе ситатта кешегә ҡәнәғәтлек килтереүсе ризыҡ һәм бетәүләй көйө уны күберәк аш-һыуҙа ҡулланалар: салаттарға, гарнирҙарға һалалар, бының менән ашамлыҡ матураҡ та күренә.



### Зәйтүн майы...

Зәйтүн емештәрен ике төрлө исем менән атап йөрөтәләр. Береһе - "оливки", икенсеһе - "маслины". Уларҙың береһе йәшел, икенсеһе ҡорән төҫтә. Төҫ айырмалығы емештең бешеп етеүетмәүенә бәйле. Емеш ни тиклем ҡөрәнерәк, унда май ҙа шул тиклем күберәк була (75 процент).

Майында йөҙгә яҡын файҙалы матдә бар: аҡһым, углеводтар, күҙәнәклек, шулай уҡ пектиндар, калий, кальций, натрий, А, В, Е витаминдары. Ошо матдәләре булғанға күрә, зәйтүн йөрәк-ҡан тамырҙары, ашҡаҙан һәм бауыр ауырыуҙарын иҫкәртә.

Кешене иң ҡыҙыҡһындырғаны - уның майы була торғандыр. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: донъяла йыйылған зәйтүн емештәренең 93 процентынан май һығып алына. Зәйтүн майын Грецияла, шулай уҡ Италия, Испания, Төркиә, Сирия, Тунис, Марокко, Мысыр, Алжир һәм Португалияла етештерәләр. Үҙенең ҡабатланмаҫ шифаһы, тәме һәм косметикала ҡулланылыуы менән бынан бер-нисә мең йыл элек уҡ билдәле булған зәйтүн майын элек "шыйыҡ алтын" тип йөрөткәндәр һәм затлы металдар менән бер рәттән, аҡса бәрәмеге итеп ҡулланғандар. Күп кенә байҙар үҙҙәренең байлығын зәйтүн майы көршәге менән иҫәпләгән.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДӨРӨҪ ЙӘШӘҮ ӨСӨН...

## үлемде лә күреү кәрәк

**Кеше үҙ ғүмеренә хәүеф янағанын бер көн эсендә бер нисә тапҡыр тойоуы ихтимал. Тимәк, үлем беҙгә ниндәй кимәлдә яҡын килеүен тоя алабыҙ. Әммә үлем күренешен аныҡ ҡына күҙ алдына килтерә алмайбыҙ, үлем тураһында уйлаһаҡ та, ул уйҙы күңел аша үткәреп тормайбыҙ.**

Аңыбыҙ донъя имenлеге хаҡында ҡайғыртыуҙы талап итә. Көндәлек мәшәҡәттәр, әлбиттә, башҡа уйҙарға урын ҡалдырмай. Ләкин үҙ-үҙең менән ҡалыу (көндәлек тормоштан ваҡытлыса айырылыу) мәңгелек тураһында уйларға ярҙам итә. Шулай уҡ үлем тураһында ла уйланырға кәрәк. Кеше үлемдең көндән-көн үҙенә яҡынлашыуын хәтеренә төшөрһә, үҙ ғүмеренә лә башҡасараҡ ҡарай башлай. Теләйме-теләмәйме, ошо ерҙә уҙғарған һәр минутын күҙәрләйәсәк. Һәм шул ваҡытта, ни тиклем сәйер яңғырамаһын, үлем йәшәү өсөн иң көслө стимулға әйләнәсәк.

Яҡындарҙың, дуҫтарҙың үлеме - үлем тураһында онотоуға ҡаршы ҡиммәтле дарыу. Юғалтыу ҡайғыһын кисергәндә ул үҙе лә был донъяла мәңге йәшәмәйәсәген аңлай. Кемделер ерләгәндә ул үҙен үлгән кеше урынына ҡуйып ҡарай. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйләгән: "Ҡәбергә ингәс, үлгән кеше уны ерләүселәрҙең аҙымдарының алыҫлашҡан тауышын ишетәсәк. Һуңынан уның менән ҡәбер генә һөйләшәсәк. Ул әйтәсәк: "Кеше! Миңә һин йәл. Һине минең менән ҡурҡытманылармы ни? Миндәге тарлыҡ, еҫ, ҡорттар үә бөжәктәр, шом тураһында һөйләмәнеләрме? Минең өсөн нимә әҙерләнең?"

"Ҡәберлектәргә килеп йөрөгөҙ. Сөнки был мәңгелек хаҡында иҫкә төшөрә. Йыназа уҡығыҙ. Бәлки, ул йөрәктәрегеҙҙе маҡсатһыҙ үткәргән ваҡытығыҙ хаҡында һағышландырыр. Гонаһ ҡылыу арҡаһында һағышҡайғыға ингән кешеләр Аллаһ һағы аҫтында", - тигән Бәйғәмбәр. Ҡатыны Ғәйшә Бәйғәмбәрҙән (с.ғ.с.) тағы шундай һүҙҙәрен еткергән: "Кемдер яҡынының ҡәберенә килһә, үлгән кеше уны ишетеп ятасаҡ. Килеүсе китергә йыйынғанда, уны изге теләктәр менән оҙатып ҡаласаҡ".

Иманлы кеше өсөн үлем ҡурҡыныс күренеш түгел. Мөьмин йөрәгенә ул яҡты һәм тәбиғи булып күренә, сөнки икенсе донъялағы мәңгелек бәхеткә ҡапҡа аса. Үлеменә дөрөҫ әҙерләнгән кеше уны тыныс һәм Хоҙайға рәхмәт әйтеп ҡабул итәсәк. Бәйғәмбәр (с.ғ.с.), ҡәбер кеше өсөн, нимә ҡылыуына ҡарап, ожмах баҡсаһына йәки тамуҡ упҡынына әүерелеүе мөмкин, тигән. Шулай итеп, кеше ерҙә нисек ғүмер иткән, ҡәберҙә лә Ҡиәмәт көнөнә тиклем шундай тормош кисерәсәк.

✓ ***Бер ваҡытта ла сығырығыҙҙан сыҡмағыҙ, ҡыҙмағыҙ, ярһымағыҙ, үҙ аңығыҙҙа булығыҙ. Биреләрҙең туҡланыу сығанағын юҡ итеү мөһим. Бары тик ыңғай уйҙар уйлағыҙ, таҙа аҙыҡ-түлек ҡулланығыҙ.***

Өлгөргән емештәрҙән май бары тик престар ярҙамында ғына һығыла, емештәрҙе махсус рәүештә йылытып тороуҙың кәрәге юҡ. Емештән шул көйөнсә генә һығып алынған май иң сифатлыһы иҫәпләнә һәм бик юғары баһалана. Был - иң таҙа һәм затлы зәйтүн майы. Уның төҫө аҡһыл-йәшкелттән ҡарағусҡыл-йәшкелтерәк. Саҡ-саҡ ҡына һиҙелгән әскелтем тәм дә ошо ысул менән етештергән майҙы билдәләй. Был майҙы медицинала һәм салаттар эшләүҙә ҡулланалар. Бер тапҡыр майы һығып алынған емештәрҙе ҡайтанан пресс аҫтына һалып, быныһында инде йылытып һығыу юлы менән май сығаралар, тик сифаты яғынан тәүгеһенән ҡайтышыраҡ продукция килеп сыға. Ә бына шифаһы яғынан икенсе төр тәүгеһенән бер ҙә ҡайтыш түгел. Уны ла салаттар эшләгәндә лә, аҙыҡты ҡурған саҡта ла файҙаланырға була. Шул уҡ емештәрҙе өсөнсө тапҡыр йылытып, һығыуҙан килеп сыҡҡан майҙан рафинирланған май етештерелә. Уныһында зәйтүнгә хас тәм бөтөнләй ҡалмай. Уны башлыса аҙыҡты табала ҡурыу өсөн ҡулланалар.

Зәйтүн майының аш-һыу донъяһында тәүге урындарҙың береһен биләүе бер кемгә лә сер теүгел. Сөнки ул табала төтәмәй, аҙыҡҡа һеңмәй һәм бер үк майҙы ҡабат-ҡабат табала ҡыҙҙырғанда ла канцероген матдәләр бүленеп сыҡмай.

"Алтын шыйыҡса"ны берәр аш ҡалаҡлап көн һайын эскән кешене атеросклероз, ҡан тамырҙарында тромбалар барлыҡҡа килеү, ашҡаҙан сей шеше, гастрит, үт ҡыуығындағы таштар һәм башҡа төрлө ауырыу-сырхауҙар борсомаясаҡ.

### Әсә һөтөн хәтерләтә

Алда әйтелгән серле матдәләр - олеин һәм линолиев кислотаһы тураһында яҙып үтмәксебеҙ. Олеин организмдан майҙарҙы сығарырға ярҙам итә, ҡан тамырҙарының стеналарын нығыта, уларҙы һығылмалы итә. Линолиев кислотаһы яраларҙы тиҙерәк уңалдырыуға булышлыҡ итә, координацияны һәм күҙҙәрҙе яҡшырта. Үҫеп килеүсе бала организмы өсөн был кислотаның әһәмиәте бик ҙур - нервылар системаһы формалашыуы ошо кислотаға бәйле. Был кислота зәйтүндә әсә һөтөндәге кеүек миҡдарҙа һаҡлана.

Май кислоталары менән бер рәттән, А, В, Е, D, К витаминдары һәм полифенол исемле матдә иммун системаһын нығыта, ҡартайыу процесын әкренәйтә, яман шеш ауырыуы барлыҡҡа килеүгә кәртә булып тора. АҠШ-тың Чикаголағы бер медицина университеты белгестәре әйтеүенсә, зәйтүн майы составындағы иң төп кислота - олеин яман шешкә килтереүсе онкогендар эшен туҡтата. Башҡа күп кенә ғалимдар ҙа зәйтүн майы тире, үпкә, эсәк яман шеше ауырыуҙарының үҫешен әкренәйтә, тигән фекерҙә. Бынан тыш, майҙы ҡулланған ҡатын-ҡыҙ үҙендә күкрәк яман шеше ауырыуы барлыҡҡа килеү ҡурҡынысын 45 процентҡа кәметә.

Эс майынан айырмалы рәүештә, зәйтүн майының кеше организмында ярты сәғәттән һуң тотошлай эшкәртелеп бөтөүен, тағы ла уның, көнбағыш майынан айырмалы рәүештә, тотошлай һеңдерелеүен иҫәпкә алғанда, был майҙың кеше организмына ебәрелгән "тиҙ ярҙам" булыуын күрәбеҙ.

Составында олеуропеин булған япраҡтарҙан ҡан баҫымын түбәнәйтә торған үлән төнәтмәләре эшләп, һаулыҡ һаҡлауҙа файҙаланалар. Шулай уҡ зәйтүн япрағы күп кенә инфекциялар менән көрәшә. Зәйтүн япрағы ыҫмалаһының яра уңалта торған сифаты күптән билдәле.

Шулай итеп, зәйтүн тотошлайы менән - ҡайыры, ыҫмалаһы, емеше, емешенән һығылған майы, япраҡтары менән кешегә хеҙмәт итә.

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Ендәр (биреләр) тураһында

**Беҙҙе нескә пландағы төрлө ен-биреләр уратып алған. Шул уҡ ваҡытта улар төрлө-төрлө. Йыһанда улар ике төрлө: яҡтылары - нур һәм мөхәббәт менән туҡлана, ҡараңғылары - негатив, тарҡалыу энергияһы менән туҡлана. Уларҙың икеһе лә кәрәк.**

Әгәр кеше асыулана, ҡуҙғый йәки үпкәләй икән (бысраҡ энергия тупланмаһы), биреләр килеп, ошо энергия менән туҡлана - беҙҙең энергетик полены таҙарта. Әгәр кеше тиҙ ҡыҙыусанға әйләнһә, биреләр йыш килә, бындай хәл даими ҡабатланһа, улар һәр саҡ эргәлә була, хатта кешелә йәшәүе лә мөмкин. Әгәр кеше негатив энергия сығармай икән, биреләр уға яҡын да килмәйәсәк - улар өсөн туҡланыр "ризыҡ" юҡ. Кеше бындай биреләрҙе үҙенә яҡын ебәрһә, улар уға "ярҙам" итә башлай: ҡуҙғый, үпкәләй, асыулана! Йәғни, кеше даими рәүештә стресс хәлендә булһын, кире эмоциялар сығарһын, насар уйлаһын өсөн улар төрлө хәл-торош тыуҙыра башлай - был улар өсөн туҡланыу сығанағы.

Биреләр кешенең телевизор ҡарағанын бик ярата, сөнки был ваҡытта кире эмоцияларҙың бөтөн спектры сығып (ҡәнәғәтһеҙлек, асыу, йәлләү һ.б.), туҡланыу сығанағы барлыҡҡа килтерә.

Шулай уҡ бер нәмә лә эшләргә теләмәгән биреләр бар - ялҡаулыҡ биреләре. Улар кешене йылан кеүек урап ала ла, уның ихтыярын һындыра һәм бындай кешеләр эргәһендә барлыҡҡа килгән (бысраҡ фатир, йыуылмаған һауыт-һаба, кер һ.б.) бысраҡ энергия менән туҡлана. Бындай биреләре булған кешеләр оҙаҡ йоҡлай, әммә барыбер йоҡолары туймай.

Битарафлыҡ биреләре лә бар. Ул ваҡытта кеше бөтөн нәмәне үҙағышына ҡуя. Бындай кешенең ихатаһы, фатиры сүплеккә әйләнергә, тирә-яҡта бөтөн нәмә емерелеп ятырға мөмкин, ә уға - барыбер! Бындай биреһе булған кешегә үҙ яҙмышы өсөн яуаплылыҡ алыуы бик ауыр, уның өсөн көн үтһә - булды, ул киләсәкте уйламай.

Алкоголь, тәмәке, наркотик энергиялары менән туҡланған биреләр бар. Әгәр кеше эсеүен, тәмәке тартыуын ташлай алмай икән, тимәк, идара итеү дилбегәһен биреләр үҙ ҡулына алған. Әгәр алкоголь биреһе асыҡҡан икән, ул: "Эсергә бир, эсергә бир, эсергә бир..." - тип ҡабатлай башлай һәм кеше, бер нәмә тураһында ла уйлай ҙа, эшләй ҙә алмай. Алкоголик саҡ ҡына эсеп алһа, эстәге тауыш күпмелер ваҡытҡа тынысланып тора, ҡулдар ҙа ҡалтырамай, нимәлер эшләп тә өлгөрөлә, ә инде бире ҡабат асыҡһа, барыһы ла яңынан ҡабатлана. Алкоголиктарға "аҡ тапма" ваҡытында мөгөҙлө, ҡойроҡло йән эйәләре күренә, тиҙәр. Күренмәй, улар уларҙа ултыра.

Шул уҡ ваҡытта биреләр, сереү, тарҡалыу, ярһыу, ҡуҙғыу энергияһы менән туҡланып, үҙҙәренә шундай шарттар инкубаторы булдырырға тырыша. Кеше йыуынмаһын, йыйыштырынмаһын, бысраҡ уртаһында ҡалһын, үҙенә оҡшаш кешеләр менән генә аралашһын, әрләшһен, һүгенһен өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләй. Улар өсөн коллектив эсеү - шулай уҡ коллектив байрам.

Биреләр - аҡыллы йән эйәләре. Мәҫәлән, әгәр бала нимәгәлер үпкәләй икән, улар уға килеп, уны йәлләүе ихтимал. Шунан бала тағы ла нығыраҡ илай башлай. Ә улар шатланышып үпкәләү энергияһы менән туҡлана. Бала үпкәләүен ташлаһа, биреләр ҙә уны ташлап китәсәк.

Ҡайһы берәүҙәр, ҡолағыма ниндәйҙер тауыштар ишетелә, ти. Был ундағы йә уның тирәһендәге биреләр тауышы. Бындай кешеләрҙе психиатрик дауаханаларға һалалар. Ә файҙаһы бармы? Уларҙы биреләрҙән азат итергә генә кәрәк!

Биреләр шулай уҡ енси бәйләнеш ваҡытында ла эйәләшергә мөмкин, шуға ла фәхишәләрҙең күбеһе биреле була.

Биреләр, әгәр кеше уларға ышанып та, үҙе берәй нәмә эшләмәһә, матди донъяның бер генә процесына ла йоғонто яһай алмай. Нескә планда бөтөн нәмә килешеү буйынса бара. Бер генә бире лә һеҙгә рөхсәтһеҙ инә алмай, уларҙы беҙ үҙебеҙ индерәбеҙ. Улар кеше үҙ-үҙенә контролде юғалтҡан, алкоголь тәьҫирендә булған ваҡытта эйәләшергә мөмкин. Эскән кешегә эйәләшкән биреләр үҙен бик тиҙ белгертә - күҙҙәрҙәге илаһи нур һүнә, кеше бөтөнләй икенсегә әйләнә һәм баш етмәҫлек эштәр ҡылыуы ихтимал (йәғни ул үҙе түгел, ә ундағы бире быны эшләй). Шуға күрә бер ваҡытта ла сығырығыҙҙан сыҡмағыҙ, ҡыҙмағыҙ, ярһымағыҙ, үҙ аңығыҙҙа булығыҙ. Биреләрҙең туҡланыу сығанағын юҡ итеү мөһим. Йәғни үҙегеҙҙе, йортоғоҙҙо, кейемегеҙҙе таҙа тотоғоҙ. Кире хис-тойғоларға бирелеүегеҙҙе туҡтатығыҙ. Бары тик ыңғай уйҙар уйлағыҙ, таҙа аҙыҡ-түлек ҡулланығыҙ. Фатирығыҙҙы даими энергетик таҙартып тороғоҙ. Доғалар тыңлағыҙ, мәсеттәргә барығыҙ, һыуыҡ һыу менән ҡойоноғоҙ, йышыраҡ мөхәббәт халәтендә йөрөгөҙ - үҙегеҙҙең тирбәлешегеҙҙе арттырығыҙ! Биреләрҙән мәңгегә ҡотолоу өсөн Аллаһы Тәғәләнән уларҙы ҡасандыр үҙегеҙгә индергән өсөн ғәфү итеүен һорағыҙ һәм асыуҙан һөйөүгә ҡайтығыҙ. Биреләргә үҙегеҙҙә булыуҙы тыйығыҙ, улар менән килешеүҙе өҙөгөҙ, фәрештәләрҙе саҡырып, үҙегеҙҙе һәм йортоғоҙҙо барлыҡ биреләрҙән таҙартыуын һорағыҙ.

Космоэнергетика каналдары теләһә ниндәй биреләрҙән арындыра. Әммә был процесс оҙаҡҡа һуҙылыуы мөмкин.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Төп саҡырыу

**Һеҙҙең, һис шикһеҙ, матур тормош башлар өсөн барлыҡ мөмкинлектәрегеҙ бар. Әгәр үҙегеҙҙе тәҡдим ителгән 30 көнлөк программаға тулыһынса бағышлаһағыҙ, түбәндәге һөҙөмтәгә өлгәшерһегеҙ:**

а) бәхет һәм тәрән ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерерһегеҙ;

б) насар ғәҙәттәргә ҡаршы көрәшеү күнекмәһе алырһығыҙ һәм үҙегеҙҙә ныҡлы ышаныс тойорһоғоҙ;

в) ысын мәғәнәһендә ныҡлы һәм оҙайлы кешелек мөнәсәбәттәренең байыраҡ донъяһын танырһығыҙ;

г) үҙ-үҙең менән идара итеүҙең башҡаларға бик аҙ билдәле күнекмәләрен һәм һәләттәрегеҙҙе тормошҡа ашырырһығыҙ ;

д) көнсығыштың оҙаҡ йәшәү серенең көсөн аңларһығыҙ;

е) сикһеҙ энергия, энтузиазм һәм ныҡлы сәләмәтлек алырһығыҙ;

ж) тыныслыҡҡа һәм барлыҡ сағылышындағы шәхсәнлеккә эйә булырһығыҙ;

з) оҙайлы ваҡытлы уңышҡа һәм финанс бойондороҡһоҙлоғона өлгәшеү сараларын табырһығыҙ;

и) үҙ яҙмышың менән идара итеүҙең тикшерелгән ысулдарына эйә булырһығыҙ.

Үткәндәр киләсәкте билдәләргә тейеш түгел, шуға күрә тормошоғоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртергә, билдәле бер кимәлгә күтәрергә теләһәгеҙ, ул күҙ йомоп асҡансы тормошҡа атҡарылыуы бик ихтимал. Һеҙҙең алдығыҙҙа - еңеүселәр, тормоштары ошо минутта булған хәл-торош һәм бәхет кимәле ҡушылмаһынан күпкә ҙурыраҡ икәнен аңлаусылар өсөн программа. Бөйөк булыр өсөн үҙегеҙҙең шәхси ҡеүәтегеҙгә мөрәжәғәт итегеҙ.

## Беренсе аҙым

Ә хәҙер күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, тәрән итеп биш тапҡыр тын алығыҙ һәм тынығыҙҙы сығарығыҙ. Киләсәктә буласаҡ берәй картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Һеҙ матур ҡунаҡ бүлмәһендә яҡындарығыҙ менән ултыраһығыҙ. Улар барыһы ла рәсми һәм нәзәкәтле кейенгән. Һәр өҫтәлдә майшәмдәр яна, ваҡиғаның мөһимлеге аңлашылып тора. Был - һеҙҙең юбилей тантанағыҙ, яҡындарығыҙға һеҙҙе шәхес булараҡ маҡтау, ҡаҙаныштарығыҙ хаҡында һөйләү өсөн мөмкинлек. Уларҙан үҙегеҙ хаҡында нимә ишетергә теләр инегеҙ? Тормош юлығыҙҙы илһамһыҙ, аныҡ ҡаҙаныштарһыҙ үтеүегеҙ, аҡыл, физик, финанс һәм рухи ҡеүәтегеҙҙе тормошҡа ашырыу өсөн ҡыл да ҡыбырлатмауығыҙ тураһындамы? "Мега тормош" программаһын ҡулланып, юбилей кисәгеҙҙә үҙегеҙгә ҡарата ниндәй һүҙҙәр ишетергә теләйһегеҙ, шуларҙы билдәләү буйынса өҫтәмә мөмкинлек аласаҡһығыҙ.

Тормоштоң иң изге маҡсаты булып үҙенден барлыҡ һәләттәренде тормошҡа ашырыу тора. Даими камиллашыу - тормош менән идара итеү нигеҙе. Әгәр ниндәйҙер корпорация менән идара итергә теләһәгеҙ, тәүҙә үҙ-үҙегеҙ менән идара итергә өйрәнегеҙ. Әгәр өйөгөҙҙә йәки бригадала эш алып барырға теләһәгеҙ, башта үҙ эштәрегеҙҙе алып барырға өйрәнегеҙ. Барлыҡ эштәрҙәге уңыш эске шәхси уңыштан башлана. Ысынлап та, мөхиттең сифатын үҙгәртәм тиһәгеҙ, эште үҙегеҙҙең эске донъяғыҙҙы яҡшыртыуҙан башларға кәрәк буласаҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 5 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.50 "Право на защиту"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Понять. Простить"
14.00 Другие новости
14.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Москва слезам не верит"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Папаши". Сериал
22.30 "Первый класс" с Иваном Охлобыстиным"
23.35 "Познер"
00.35 Ночные новости
00.55 "Белый воротничок"
01.45, 03.05 "Двое". Драма
03.00 Новости
03.50 "Веселые ребята - артисты и надзиратели"

### РОССИЯ 1
